*Ғәли Ишбулатов*

# ғәрәп яҙмаһын өйрәнеүселәргә әлифба

عەرەپ ياذماهئن
ئۆيرەنئۆسئلەرگە
ئەليفبا

*Ғәли Ишбулатов*

# Ғәрәп яҙмаһын өйрәнеүселәргә әлифба

Икенсе баҫмаһы

ӨФӨ
БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
1988

81.2 баш-8
И 90

Ғәрәп яҙыуы
Э. Ф. ИШБИРҘИН тарафынан башҡарылды

**Ишбулатов Ғәли Ирғәлиевич**
И 90 Ғәрәп яҙмаһын өйрәнеүселәргә әлифба. — 2-се баҫ. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1988 й. — 64 бит.

1928—1930 йылдарға тиклем башҡорт яҙмаһы, эш ҡағыҙҙары ғәрәп алфавитында алып барылған. Хәҙер ул яҙма менән яҙылған китаптар, журналдар, документтар китапханаларҙа, архивтарҙа һаҡлана. Халҡыбыҙҙың үткән тормош тарихын өйрәнгәндә шул материалдарға мөрәжәғәт итергә тура килә.

Был ҡулланма ошо яҙмаларҙы уҡырға теләүселәргә ярҙам итеү өсөн сығарыла.

И $\frac{4310020000-232}{М\ 121(03)-88}$ 172—88 81.2 баш-8

© Башҡортостан китап нәшриәте, 1986 й.

## ИНЕШ ҺҮҘ

Башҡорттар йәшәгән ерҙәргә ғәрәп хәрефе менән яҙылған төрлө китаптар, яҙмалар килеп инеүгә мең йыл самаһы ваҡыт үткән. Беҙҙең олатай-өләсәйҙәр башта уларҙы уҡырға өйрәнгәндәр. Аҙмы-күпме ваҡыт үткәс, үҙҙәре лә шул хәреф менән яҙа башлағандар.

Шул ваҡыттарҙан бирле үҙ заманының уҡымышлылары, мәғрифәтселәре, шағирҙары, сәсәндәре, ил батырҙары, ырыу башлыҡтары, хәлфә, мөғәллимдәр һәм башҡалар ҡулдан күп нәмә яҙып ҡалдырғандар. Улар араһында тарихи документтар менән шәжәрәләр ҙә, эпос, әкиәт менән легендалар ҙа, йыр, ҡобайыр, бәйет менән шиғырҙар ҙа, көләмәс, һамаҡ менән таҡмаҡтар ҙа, мәҡәл, әйтем менән йомаҡтар ҙа бар. Боронғо ҡәбер таштарындағы, һәр төрлө һәйкәлдәрҙәге яҙыуҙар ҙа ғәрәп хәрефе менән башҡарылған.

XIX быуатта, шулай уҡ XX быуат баштарында, бигерәк тә Совет власының тәүге 10 — 15 йылы эсендә ғилми, политик темаларға байтаҡ китап, брошюра, әҙәби әҫәрҙәр, халыҡ ижады ҡомартҡылары, журнал, газета, һәр төрлө мөһим документтар ана шул ғәрәп хәрефе менән баҫылған. Уларҙың байтағы Мәскәүҙә В. И. Ленин исемендәге СССР Дәүләт китапханаһында, СССР Фәндәр академияһының Мәскәү, Ленинград ҡалаларындағы, шулай уҡ уның филиалдарындағы китапханаларҙа, Н. К. Крупская исемендәге Башҡортостан республика китапханаһында, Башҡорт АССР-ы китап палатаһында һаҡлана.

Октябрь революцияһынан һуң 15 — 20 йыл дауамында партия, совет учреждениеларында эш йөрөтөү ҙә ғәрәп ғәрефе менән алып барылып, тарихи, ғилми әһәмиәте ҙур булған бик күп документтар (про-

токолдар, докладтар, һәр төрлө аңлатмалар һ. б.) шул хәреф менән яҙылған. Ул документтар КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитеты архивында, Башҡорт АССР-ы Үҙәк дәүләт архивында һаҡлана.

Һуңғы йылдарҙа тарих, тел, әҙәбиәт, культура мәсьәләләре менән ҡыҙыҡһыныусы иптәштәр, бигерәк тә йәштәр араһында, ғәрәп алфавитын өйрәнеп алып, уның менән ана шул башҡорт, татар телдәрендә яҙылған йәки баҫылған ҡомартҡыларҙы уҡырға теләүселәр күбәйҙе.

Шул иптәштәргә аҙмы-күпме ярҙам итеү маҡсаты менән эшләнде был әлифбалы ҡулланма. Уны ғәрәп алфавитындағы яҙмаларҙы яҡшы белеүсе оло быуын вәкилдәренән, шулай уҡ республиканың ғилми учреждениеларында эшләүсе тел, әҙәбиәт, тарих ғалимдарынан байтаҡ иптәштәр ентекләп уҡып сыҡтылар. Улар ҡулъяҙманы хуплау менән бергә файҙалы кәңәштәр ҙә бирҙеләр. Ысын күңелдән рәхмәт белдерәм ул иптәштәргә.

Ҡулъяҙма Башҡортостан дәүләт университетының башҡорт теле, башҡорт әҙәбиәте кафедраларының берлектәге ултырышында, шулай уҡ СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми советы ултырышында тикшерелде һәм баҫып сығарырға тәҡдим ителде.

**Ғ. Ишбулатов**

## «ӘЛИФБА»НЫ ӨЙРӘНЕҮСЕЛӘРГӘ АҢЛАТМАЛАР

Билдәле булыуынса, ғәрәп хәрефтәре менән яҙыу быуаттарға һуҙылған ваҡыт эсендә лексикала, орфография яғынан күп үҙгәрештәр кисергән. Иң тәүге яҙыуҙарҙың һүҙҙәр составында башҡорттарҙың төп өлөшөнә бик аҙ аңлашыла йәки бөтөнләй аңлашылмай торған ғәрәп, фарсы һүҙҙәре күп булған. Шул уҡ ваҡытта башҡорт теленә хас өндәр өсөн ғәрәп алфавитына тейешле хәрефтәр өҫтәлмәгән, ә ғәрәптәрҙә йөрөгән (ҡөрьәндә булған) хәрефтәр менән генә сикләнелгән. Шунлыҡтан, башҡорттарҙың күпселегенә боронғо яҙыуҙарҙы, хатта төрки телендә яҙылғандарын да уҡыу ҡыйын ғына булған.

Дөрөҫ, элекке быуаттарҙа, бигерәк тә XIX быуатта, ғәрәп алфавитын башҡорт, татар телдәре фонетикаһына яҡынлаштырырға ынтылыуҙар булыуын булған. Ләкин һәр мәғрифәтсе, һәр уҡымышлы, һәр шәжәрә яҙыусы һәм башҡалар специфик хәреф шәкелдәрен үҙҙәре теләгәнсә алғанлыҡтан, берлек булмаған. Уларҙы берләштерерлек ойошма ла төҙөлә алмаған. Был иһә төрлө-төрлө авторҙарҙың яҙмаларын йәки китаптарын уҡыуҙа ҡыйынлыҡтар тыуҙырған.

Ул төрләләктәң байтағын, шулай уҡ бер үк һүҙҙең, хәрефтең төрләсә яҙылыуын беҙ әлифбаны өйрәнеү барышында күрербеҙ.

Ғәрәп хәрефтәрен өйрәнеүҙе беҙ Башҡорт АССР-ы хөкүмәте тарафынан 1928 йыл башында раҫланған һуңғы орфографияға тура килтереп төҙөлгән рәсми алфавиттан башлайыҡ. Ул орфография ишетелгәнсә яҙыу нигеҙенә ҡоролоуы, башҡорт телендәге өндәргә ярашлы хәрефтәр алыныуы яғынан бөгөнгө орфографияға яҡын тора. Был — ғәрәп хәрефе менән яҙылғандарҙы уҡырға, үҙең дә яҙырға өйрәнеүҙең еңелерәк юлы булыр.

Шул анһатты белеп алғас, ҡыйынға, элеккерәк, боронғо яҙыуҙарҙы өйрәнеүгә ҡарай юл тоторбоҙ.

Әлифба ун дәрестән тора.

Шуны ла белеп китәйек: әлифбаның дәрестәр һаны төрки, ғәрәп яҙмаларында ҡулланылған цифрҙар менән күрһәтелде. Ул цифрҙарҙы белеү һис тә зарар итмәҫ.

## Беренсе дәрес — ١ نسىٔ ده رئس

Был дәрес барышын ҡарағыҙ.

Был дәрестә дүрт хәреф: ا —**а**, ت —**т**, ر —**р**, ق —**ҡ** өйрәнелә.

Хәрефтәр менән танышҡас, ошоларға иғтибар итегеҙ: Был «Әлифба» кәмендә урта белеме булған һәр кемдең үҙ алдына, үҙ тырышлығы менән, һис ниндәй уҡытыусыһыҙ өйрәнеүе нигеҙенә ҡоролған. Быға ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған һүҙҙәр аҫтына хәҙерге башҡортса хәрефтәрҙе ҡуйып, еңел өлгәшеп була.

تارت. تاراق. قات. قارار.

*рарак так карат трат*

قار. تار. قارت.

*трак рат рак*

قارات. تارقاتا. تاقتا.

*аткат атакрат тарак*

تارات. تاراتا. قاراتا.

*атарак атарат тарат*

| Ғәрәп хәрефтәре | | | | Башҡортса әйтелеше |
|---|---|---|---|---|
| Аҙакта | Уртала | Башта | Яңғыҙ | |
| ـا | — | * — | ا | а |
| ـت | ـتـ | تـ | ت | т |
| — | — | * * تـ | — | ҡалын т |
| ـر | — | ر | ر | р |
| ـق | ـقـ | قـ | ق | ҡ |

قارا تاقتا. تاراققا قارا. قارتتار. قاتا. قاق.

*как атак раттрак арак аккарат аткат арак*

Тик айырма шунда: ғәрәп хәрефе менән яҙылған тексты уҡыу ҙа, яҙыу ҙа уң яҡтан башланып, һулға табан китә. Шунлыҡтан, «Әлифба» һүҙҙәре аҫтына хәҙерге хәреф менән яҙылған һүҙҙәр ҙә, бик үк килешле булмаһа ла, уңдан һулға ҡарай уҡыла.

Тыныш билдәләренән өтөр аҫтан өҫкә ҡарай күтәрелеп, осо уңға бөгөлә ( ، ), ә һорау билдәһе уң яҡҡа ҡаратып ҡуйыла ( ؟ ). Цифрҙар иһә уңдан һулға түгел, ә һулдан уңға уҡыла ( ١٩٧٠ – 1975 ).

Ғәрәп яҙыуында баш хәрефтәр юҡ. Унда һөйләм башында ла, яңғыҙлыҡ исемдәрҙә лә шул уҡ юл хәрефтәре яҙыла.

Юлда хәрефтәр теҙелешенең дәфтәр һыҙығына ҡарата тейешле урыны, дөрөҫ яҙылыш тәртибе бар. Яҙғанда улар дәфтәр һыҙығы буйына тигеҙ генә теҙеләләр. Ләкин, рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән хәҙерге башҡорт алфавитында ла остары, нөктәләре һыҙыҡтан байтаҡ өҫкә сыға йәки аҫҡа төшә торған хәрефтәр булған кеүек (б, д, ё, ҙ, ң, р, ҫ, у, ү, ф, һ, ц, щ), ғәрәп хәрефтәренең дә ҡайһы берҙәре буй һыҙыҡтан йә өҫкә сығарып, йә аҫҡа төшөрөп яҙыла. Быны «Әлифба»лағы яҙылышта асыҡ күреп була. Быға иғтибар итегеҙ, ә яҙырға өйрәнгәндә баштан уҡ шаҡмаҡ һыҙыҡлы дәфтәргә яҙығыҙ (11-се һәм 61-се биттәрҙе ҡарағыҙ).

Был дәрестә йәнә бер ҙур ғына айырманы белеп китәйек. Рус йәки латин графикаһы нигеҙендәге хәрефтәр менән яҙғанда һүҙҙәге бөтә хәрефтәр бергә, ҡушып яҙыла. Ә ғәрәп яҙыуында улай түгел. Унда бер үк һүҙ икегә, өскә, дүрткә, хатта унан да күберәк өлөшкә бүлеп яҙыла. Мәҫәлән, ошо дәрестәге تار — *тар* һүҙе ике өлөшкә, تارت — *тарт* һүҙе өс өлөшкә, تارات — *тарат*, تاراتا — *тарата*, تارقاتا — *тарҡата* һүҙҙәре дүртәр өлөшкә бүлеп яҙылған. Сөнки ғәрәптә аҙаҡ яғына, йәғни үҙенән һуң килгән хәрефкә, ялғап, тоташтырып яҙып булмай торған өҙөк хәрефтәр бар. Был беренсе дәрестә улар икәү: ا — **а**, ر — **р**. Ундай хәрефтәр унға етә. Уларҙы беҙ тейешле дәрестә күрә барырбыҙ.

Һүҙҙәрҙәге был күренеште ижек менән бутарға ярамай. Сөнки, мәҫәлән, күп ижекле قىلىق — *ҡылыҡ*, قىلىقلى — *ҡылыҡлы*, تىنىسلىقتا — *тыныслыҡта*

һүҙҙәре ҡушып яҙыла ала. Ә бер ижекле تارت

һүҙе өскә, ике ижекле قارار һүҙе дүрткә, ундағы رار

ижеге үҙе өскә бүленә. Сәбәбе: тәүге өс һүҙ эсендә уларҙы бүлгеләүсе өҙөк хәрефтәр юҡ, һуңғы икәүҙә — бар (ا ر) . һүҙ эсендәге был бүлемдәр өлөш тип алынды. Өлөштәр, күреүебеҙсә, бер хәрефле лә, күп хәрефле лә була.

Ғәрәп хәрефтәрен графаларға урынлаштырып күрһәтеү ҙә был мәсьәләне асыҡлай төшә. Беренсе графала хәрефтең яңғыҙ яҙылышы, икенсеһендә — һүҙ башында йәки һүҙ эсендәге өлөш башында яҙылышы, өсөнсөһөндә — һүҙ йәки өлөш уртаһында яҙылышы, дүртенсеһендә — һүҙ йәки өлөш аҙағында яҙылышы бирелгән. Күренеүенсә, уртала яҙыла алмай торған хәрефтең аҙағына ялғап яҙып булмай.

Был дәрестә беҙ ҡалын ات — т хәрефе барлығын күрәбеҙ. Сөнки 1928 йыл ҡабул ителгән алфавитта тартынҡыларҙы ҡалынайта торған ҡалын һуҙынҡылар етерлек түгел. Шунлыҡтан ҡалын әйтелешле һүҙҙәрҙе бер иш яҙыла торған нәҙек әйтелешлеләрҙән айырыр өсөн бер нисә тартынҡы хәреф алдына аҫ яҡтан ҡалынлыҡ билдәһе ( ·ı· ) ҡуйыу ҡағиҙәһе индерелгән. Ул хәрефтәр менән беҙ «Әлифба»ны өйрәнеү барышында үҙ урынында, тейешле миҫалдар килтереп, танышырбыҙ. Тик беренсе дәрестәге ҡалын ات т-ға миҫал килтереп булмай. Сөнки һүҙ яһар өсөн хәҙергә хәреф етешмәй. Миҫалды алғараҡ китеп алайыҡ. Ҡалын һүҙ: اتش — тыш, нәҙек: تش —

теш; ҡалын: تۇر — тор, нәҙек: تۆر — төр; ҡалын: تۇز — тоҙ, توز — туҙ, нәҙек: تۆز — төҙ, توز — түҙ һ. б.

Күреүебеҙсә, беренсенән, ҡалын ت тик һүҙ башында ғына яҙыла. Икенсенән, әгәр һүҙ эсендә ҡалын һуҙынҡы йәки ҡалын тартынҡы булһа, ул саҡта ҡалынлыҡ билдәһе ҡуйылмай: تار — тар, توق — туҡ һ. б. Был ике ҡағиҙә ҡалынайтылған хәрефтәрҙең бөтәһенә лә ҡағыла.

Был дәрестә ике хәрефкә иҫкәрмә (* ⁑) бирелгән. Ундай иҫкәрмәләр алдағы дәрестәрҙә лә булыр. Был иҫкәрмәләрҙең барлығын хәтерегеҙгә алып ҡуйығыҙ. Уларҙы хәҙер, бер юлы өйрәнеү ауыр булыр. Сөнки уларҙа, берҙән, 1928 йылғы орфографиянан элекке яҙмаларҙағы хәрефтәр өйрәнелә, икенсенән, уларға бирелгән миҫалдарҙа хәҙергә әле үтелмәгән хәрефтәр осрар. Әлифбаның ун дәрестән торған ошо төп өлөшөн өйрәнеп бөткәс, ул иҫкәрмәләргә беҙ кире ҡайтырбыҙ.

Иҫкәрмәләр ғәмәлдә «Әлифба»ның икенсе бүлеген тәшкил итә. Китаптың 42-се битенән башланған күнегеү текстарының да күп өлөшө ошо иҫкәрмәләрҙә өйрәнелгән хәрефтәрҙе, һүҙҙәрҙе, уларҙың яҙылышын күңелдә яҡшыраҡ нығытыу маҡсатын ҡуя. Ә иҫкәрмәләрҙе 1928 йылғы орфография хәрефтәре янында, уларға бәйләп биреү был элекке хәрефтәрҙе үҙләштереү эшен еңеләйтер.

Дәрестәргә бирелгән эштәрҙе тулы үтәргә тырышығыҙ. Был һеҙҙе үҙегеҙ өйрәнгән материалды хәтерҙә нығыраҡ ҡалдырырға, матур яҙырға күнектерер.

**Эш.**

1. Ошо һүҙҙәрҙе, һөйләмде уҡығыҙ:

تات . تاتا . قارار . قاراتا . قارت تاقتا تاراتا .

2. Шуларҙы уҡ күсерегеҙ ҙә аҫтына башҡортса хәрефтәр ҡуйығыҙ. Өлгө:



*рарак атат тат*

3. Түбәндәге һүҙҙәрҙең һәр береһен өсәр юл итеп, күсереп яҙығыҙ. Өлгө:





**Икенсе дәрес** — ٢ نسیٔ د ە رٔس

Бында белеп китә торған нәмә шул: ئ ئ хәрефтәренең өҫтөнә **һәмзә** ( ء ) ҡуйылғаны ( ئ ) һүҙҙәр, өлөштәр башында яҙыла: ئات — ат, ئاق — аҡ, ئل — эл, ئال — ал һ. б. Ә өҫтөнә **замза** ( ٔ ) ҡуйылғаны ( ئٔ ) һүҙ эсендә, өлөштәр башында яҙыла: ئرئو — эреү, ئرئو, — ырыу, بئل — бел, بئل, — был, بئلئو — белеү һ. б.

Бында өҫтәп аңлата торған бер нәмә бар. Һеҙ «ҡырҡма шрифт» тип йөрөтөлгән хәрефтәр менән 20—30-сы йыл-

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ئ | ـئ | ئـ * ـئـ | ئ | э, е, ы |
| — | — | ئـا | — | ы |
| ب | ـبـ | بـ | ب | б |
| — | — | بـا | — | ҡалын б |
| و | — | و | و | у, ү, в |
| ـل | ـلـ | لـ | ل | л |

ئل · بئل · بئرلئ · بال ·

*лаб елреб леб лэ*

بالا · بالتا · بالئق · قارالتئ ·

*ытлараҡ ҡылаб атлаб алаб*

تال · ئال · ئاق · واقئت ·

*тыҡау ҡа ла лат*

ئالتئ · بالا · ئور ·　　　تئل · واتئق · ئاقتئق · ئوراق ·

*рү алаб ытла ҡару ҡытҡа ҡытау лет*

بول · ابول · ئوت ·　　　ائور · بورئ · ابور · ئرئو · ائرئو

*тү луб лүб уыры үерэ руб ерүб ру*

ائوت · بولئو · ابولئو · بئل · ابئل · بئلئو · ابئو ·

*уыб үелеб лыб леб уылуб үелүб ту*

дарҙа баҫылған китап, журнал, газеталарға осраһығыҙ. Уларҙа был «Әлифба»лағы «яңғыҙ» йәки «аҙаҡта» яҙыла торған бәғзе бер хәрефтәрҙе, мәҫәлән, ل، ـب، ق، ـت، ئ хәрефтәрен, был яҙылышта аҙ күрерһегеҙ. Сөнки уларҙың шәкеле һүҙҙең аҙағында ла һүҙ йәки өлөш башындағы һымаҡ яҙылыр. Мәҫәлән بورئ — бүре, قارت — ҡарт, تاراق — тараҡ, تال — тал,

بڒرلك — берле, واقتت — ваҡыт, بالقق — балыҡ, بڒل — бел һ. б.

Был дәрестәге ҡалын ا ب ء ئ хәрефтәре лә, беренсе дәрестә әйтелгәнсә, һүҙ башында ғына һәм ҡалын һуҙынҡыһы йәки ҡалын тартынҡыһы булмаған һүҙҙәрҙә генә яҙыла: ابڒلبڒل — былбыл, ائوت — ут һ. б.

1928 йылғы орфографияға тиклем ڒ ۆ ێ һуҙынҡыһы һирәк ҡулланылған йәки бөтөнләй ҡулланылмаған. Шунлыҡтан, ошондай һүҙҙәр һуҙынҡыһыҙ: бел — بل /бл/, бер — بر /бр/, балыҡ — بالق /балҡ/, ваҡыт — واقت /ваҡт/ тип яҙылған. Ә был һуңғы орфографиянан саҡ ҡына элегерәк ҡоро, бөрө кеүек һүҙҙәрҙең аҙағы о, ө менән түгел, ә ێ менән яҙылған: قۆرێ — ҡоры, بۆرێ — бөрө һ. б. Элегерәк инде, был ێ ۆ ڒ хәрефе алфавитта бөтөнләй юҡ саҡта, уның урынына و — у яҙыу ҙа булған: барып урынына باروب /баруб/, биреп урынына بيروب /бирүб/, ҡаҙып урынына قازوب /ҡазуб/ һ. б.

Ошо мәсьәләгә лә иғтибар итегеҙ: 1928 йыл ҡабул ителгән ғәрәп алфавитында һүҙ башында килә торған үҙенә башҡа **а, у, ү** хәрефтәре юҡ. Улар һәр ҡайһыһы ике хәрефте: ء менән ا -ны ҡушып (ئا — **а**), ء менән و -ны

ҡушып ( ئو‚ — у, ئو — ү) яһала. Миҫалдар: ئال — ал, ئات — ат, ئوراق — ураҡ, ئوت‚ — ут, ئوت — үт һ. б.

و хәрефенә ҡарата тағы шуны әйтергә кәрәк. Был хәреф һүҙ уртаһында йәки аҙағында **у, ү** өндәрен белдерһә лә, һүҙ башында хәҙерге **в** урынына йөрөй: واقت — ваҡыт, واتق‘ — ватыҡ, وەكيل — вәкил һ. б.

Бер үк ваҡытта ул рус теле аша ингән һүҙҙәрҙә **о**, хатта **ю** хәрефтәре вазифаһын да үтәй: زونت‚ — зонт, پولوس — полюс, بولليتين — бюллетень һ. б.

Бындағы لا لا — **ла**-ның яҙылышына иғтибар итегеҙ. Ул ل ـل — **л** хәрефен яңғыҙ ا — **а**-ға ҡушыу, бәйләү юлы менән яһала. Тик ل ـل хәрефенең аҙаҡҡы кәкерсәк осо ҡыҫҡартыла: لا — **ла**. Һеҙ тағы لا ـلا рәүешендәге **ла**-ны күрерһегеҙ: ئارالا — арала, قالاق — ҡалаҡ һ. б.

Хәрефтәрҙең бындай бәйләнеше *лигатура* тип атала.

**Эш.**

1. Ошо һүҙҙәрҙе уҡығыҙ:

قاتنق . قالاق . تور. تورى ئات . بتلبتل .

ئاقبور ئال . ئورات . ئوراتتو . پولتترتو . بالقتتو .

ئوق ئاتتو . ئاوتل . بتولانتو . بتو .

2. Был һүҙ, һөйләмдәрҙе бишәр юл итеп күсереп яҙығыҙ:

ئورال تاوئ. قئر ئاتئ. ئارقاوئل. ئورتاوئل.

3. Түбәндәге һүҙҙәрҙе күсереп, аҫтына башҡортса хәрефтәр ҡуйығыҙ:

ئرئ بالئق. قارت بالئققا بارا. بئل - ئاقئق.

بئلتئر. ئوراق ئورا ئوراق ئول ئور. ئوت. ئوت.

## Өсөнсө дәрес — ٣ نسۇ ده رئس

ئارپا پارتا. ماتور. ئورام.

*мару рутам атрап апра*

مئر. راما. قالپاق مئلتئق

*ҡытлым ҡаплаҡ амар рым*

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| م | ـمـ | مـ | م | м |
| — | — | مـ | — | ҡалын м |
| پ | ـپـ | پـ | پ | п |
| — | — | پـ | — | ҡалын п |

تام-تام! ئالمالا مئر بار. ئاقلا. ئالا ئاتئم. قاقما.

*амкак мыта ала алка раб рым аламла мат-мат*

تورئ ئاتئم. ماقار. ماتور بالا. مارات قاراپ قالا.

*алаҡ параҡ тарам алаб рутам ракам мыта ырут*

بار. بارما.

*амраб раб*

Был дәрестә ҡатмарлы йәки ауыр аңлашыла торған нәмә юҡ. Ҡалын ـمـ —м, ـپـ —п хәрефтәре үткән дәрестәрҙә әйтелгән ике ҡағиҙәгә буйһона.

Өҫтәп шуны әйтергә кәрәк. Элекке яҙыуҙарҙың күбеһендә һүҙ аҙағында پ ـپ —п урынына ب ـب — **б** яҙылған: كيتاب — китаб, قاراب — ҡараб, قوبُب ҡубыб һ. б.

Ап-аҡ, ҡап-ҡара, туп-тура кеүек һүҙҙәр ئاپپاق — аппаҡ, قاپقارا — ҡапҡара, توپتورا — туптура рәүешендә дефисһыҙ яҙылған.

**Эш.**

1. Ошо һүҙ, һөйләмдәрҙе уҡығыҙ:

پُر-پُر، ئيتُو. تاقتا ئالُپ قال. پار ئات.

قاراپ، ئولتُر. قارا، تورى. قارا ئات. ئاپپاق.

2. Түбәндәге һүҙ, һөйләмдәрҙе күсереп, аҫтына башҡортса хәрефтәр ҡуйығыҙ:

بِلُم. ئالما. تارماق. ئالپاوُت. بالام، بالاقايُم.

قالا ئورامى ماتور بولا. پار تورى.

# Дүртенсе дәрес — ٤ نسی د ه رس

ئیل . کیل . نائیل . تیك .

*кит лиан лик ли*

کیتاپ. ئیکی . یاقتی . یاوا .

*ауай ыткай еки патик*

یاتاق. یئل . ,یئل . مین

*ним лый лей ҡатай*

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ی* | ـیـ | یـ | ی | и, й, е |
| — | — | ایـ | — | ҡалын й |
| ن | ـنـ | نـ | ن | н |
| — | — | انـ | — | ҡалын н |
| ـكـك | ـکـ | کـ | ك | к |

کیتاپ ئوقئیم. یاوئمبای ئوقئی ئالمای. ئوقی ، نایمان ،

*, намйан , ыку йамла йыку йабмыуай мыйыку патик*

ئوقی . یول، .

*луй ыку*

1928 йылғы алфавитта һүҙ башында йәки өлөш башында килә торған үҙенә башҡа **и, ю, я** хәрефтәре юҡ. Уларҙың һәр ҡайһыһы икешәр хәрефте: ئـ менән ـیـ -не ҡушып ( ئیـ —и), یـ менән و -ны ҡушып ( یو —ю), یـ менән ا -ны ҡушып ( یا —я) яһала. Миҫалдар: ئیل — ил, ئیتئك —итек, ,یول — юл, یوق — юҡ, ,یون — юн, یون — йүн, یاو —яу, ئایاق —аяҡ һ. б.

Һүҙ йәки өлөш башында килә торған **йы, йе, е** һәр береһе یـ менән ئـ -ны ҡушып ( یئـ ) яһала: ,یئیئلو

---

* Элекке яҙмаларҙа һүҙ аҙағындағы ی хәрефе ә, а итеп тә уҡылған. Миҫалдарҙы 36-сы биттән ҡарағыҙ.

— йыйылыу, ئايىق — айыҡ, ئايىرىم — айырым, سه يىر — сәйер, به يىل — бәйел, يىگىت — егет һ. б.

Йәнә шуны белеп китәйек. Хәҙерге كىيىك، يىيىلىو، يىر، كىيىم، بىيىك، يىتىم، рәүешендә яҙыла торған һүҙҙәр был орфографиянан элек ييتم، اوقيق، كييك، ييلو (йәки يتم) يير، كييم، بييك، рәүешендә, ә хәҙерге كيتتئ، قايتتئ кеүек аҙағы ئ — ы, е-гә бөткән һүҙҙәр كيتتى، قايتتى тип, ى — и менән яҙылған, хатта и итеп уҡылған.

Өсөнсө дәрестә беҙ хәрефтәрҙең лигатура тип аталған ҡушылыу, бәйләнеүен белеп үткәйнек. Бында ла баштағы ک — к менән аҙаҡҡы ا — а бәйләнешеп, کا ка барлыҡҡа килтерә: كالينين — *Калинин.*

Китаптарҙа ك шәкелендәге хәреф осраһа, уны ک — к тип уҡығыҙ: كيتاپ — китап, كيل — кил һ. б.

**Эш.**

1. Ошо һүҙ, һөйләмдәрҙе уҡығыҙ:

لينين . كالينين . نيكالاى . ماماى . يىر. ايىر، توى.

2. Был һөйләмдәрҙе өсәр юл итеп күсерегеҙ:

مين كيتاپ ئالام. باتتال ئاقبور ئالا. ئاقبور كوپ.

مارات، كيتاپ كيلتێر، ئوقێيێق. نائيپل ئوتێن يارا.

3. Түбәндәге һүҙҙәрҙе күсереп, аҫтына башҡортса хәрефтәр ҡуйып сығығыҙ:

باتوم. بايكال. ئاقبولات. بايتورين. ئيرا. راماى. نايمان.

## Бишенсе дәрес — ٥ نسێ ده رێس

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ـگ | ـگـ | گـ | *گ | Г |
| ـد | — | د | د | д |
| *** ـه ـه | — | *— | ه ھ | ә |
| ـف | ـفـ | فـ | ف | Ф |

ده فته ر. تێگێو. فه ريت.

*тирәф уегет рәтфәд*

تێگێ. تێگێن. ئه يوپ.

*пүйә негет егет*

فاتيما. ده رت. ده رتلێ. ده و. ده ورێ. ميتينگ.

*гнитим реүәд үәд елтрәд трәд амитаф*

بێل گريفێل قاتێ. تێگێ پارتا به له كه ى. ئه مينه.

*әнимә йәкәләб атрап егет ытак лефирг лыб*

Бында һүҙ башында килә торған ә-нең булмауын күрәбеҙ. Ул ئـ менән ـه -не ҡушып ( ئه — ә) яһала: ئه له م — әләм, ئه مه ل — әмәл, ئه مين — Әмин һ. б.

Һүҙ йәки өләш башында килә торған **йә** лә ике хәрефте يـ менән ـه -не ҡушып ( يه — йә) яһала: يه يه و —

йәйәү, يه ملى — йәмле, مه ريه م — Мәрйәм һ. б. Иғтибар итегеҙ: бындағы ه ع ە — ә ябыҡ ижектә лә, асыҡ ижектә лә ә булып уҡыла: د ه و — дәү, د ه ر ت — дәрт, د ه فته ر — дәфтәр, به له — бәлә, فه ريد ه — Фәридә, به له كه ى — бәләкәй һ. б.

Рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙәге **я, о,** хатта **а, е** хәрефтәре был орфография буйынса күп урында ه ە — ә итеп яҙыла: отряд — ئه تره ت (әтрәт), разряд — ره زره ت (рәзрәт), комитет — كه ميته ت (кәмитәт) һ. б.

**Эш.**

1. Ошо һөйләмдәрҙе уҡығыҙ:

بالالار د ه فته ر ئالا. گه ره ى كيتاپ قاراى. بئل تاقتا قاپقارا ئيكه ن. ئه لئگئ قارا قه له م ئانا ياتا. ئه يت.

2. Был һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ:

د ه مينف مه كته پته ئوقئتا. فه ريت د ئگئت قايناتا

3. Быларын күсереп яҙып, аҫтына башҡортса хәрефтәр ҡуйығыҙ:

ئاوئلدا بئيئك ئورئندا ماتور كلوب بار. فه ريد ه

بئيه له يگه د ئبئت ئيله ى. ره ئو فه بيللئك به يله ى.

## Алтынсы дәрес — ٦ نسێ د ه رێس

| ع | ـعـ | عـ | *ع | F |
|---|---|---|---|---|
| س | ـسـ | سـ | *س | С |
| ش | ـشـ | شـ | ش | Ш |

ئاعاس· شالقان· ئولتێرعێس·

*сығрытлу наклаш сағa*

ئيپتەش· د ه رێس باشلاندێ

*ыдналшаб серәд шәтпи*

شارشاو ئاسێق. تێش. ,تێش. يێش. ئاش ئاشا·

*аша ша шый шыт шет кыса уашраш*

يالعان ئش - يارتێ ئش· يه پيه ش·

*шәй-пәй шэ ытрай- шэ нағлай*

Был дәрестәге ـسـ — с хәрефенә лә ҡайһы бер һүҙҙәрҙә ҡалынлыҡ билдәһе (.ˌ.) ҡуйыла: سومێو — сумыу, سوت-سوت — сут-сут һ. б.

**Эш.**

1. Ошо һөйләмдәрҙе уҡығыҙ:

ئالعا، ئالعا ساقێرا كاممونيستار·

ئالدێنعێ بريگادانان ئالعا سێعايێق·

بێل شەكێرت تێرێشا، ئيپتەشێنه لە بولێشا·

سالاوات باتێر. يولاى باتێر. ماتروسوف باتێر·

2. Был һөйләмдәрҙе күсереп яҙып, аҫтына башҡортса хәрефтәр ҡуйығыҙ:

قالعان ئشكه قار ياوا . سامات كيله سه كتێ تاسوير لاى .

3. Түбәндәге һүҙҙәрҙе бер нисәшәр юл итеп, күсереп яҙығыҙ:

شپاگات. بيش سه عه ت. قئلعان. گه ره نكه. دوعا.

**Етенсе дәрес** — ٧ نسێ ده رێس .

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ـژ | — | ژ | * ژ | Ж |
| ـۋ | — | ۋ | ** ۋ | В |
| ـز | — | ز | ز | З |

ژورنال. كامزول. مه ژيت.

*тижәм лузмак ланруж*

ره ژه پ. زاۋوت. گاراژ.

*жараг тувaз пәжәр*

عاريزا. زال. ۋاگون. كه زه. ۋاكزال.

*лазкав әзәк нугав лаз азирағ*

زونت. زه كى مه كته پكه كيتتێ.

*еттик әкпәткәм икәз тноз*

Бында өс хәрефтең дә аҙаҡ яғына ялғап яҙылмай, яҙыла ла алмай. Был хаҡта беренсе дәрестә үк белеп киткәйнек. Ундай хәрефтәр хәҙер һигеҙгә етте ( ا —а, ـر —р, ـو —у, ـد — д, ه ە ـه —ә, ـژ —ж, ـۋ —в, ـز —з). Улар кеүек тағы ике хәреф ـذ —ҙ, ـۆ —о, ө) ҡалды.

**Эш.**

1. Ошо һүҙ, һөйләмдәрҙе уҡығыҙ:

ۋلاد يمير. ئيۋان. ۋ يرا. ئيكئ ژورنال ئالدئم.

توعان ئيلئم. ئيۋانوف - ئالدئنعئ زابويشيك.

2. Был һөйләмдәрҙе уҡығыҙ ҙа бер нисәшәр юл итеп күсерегеҙ:

عاتا مئنەن عاساتار زاۋوتتا، وەلى ۋاكزالدا ئشلەى.

زەينى قو رايسئ. شاكير ئاعاى ماگازيندا ستو رژ.

## һигеҙенсе дәрес — ٨ نسئ دەرس

حات. حاتا. هاۋئت.
*тыуаһ атах тах*

هاذاق. گوناه. گئواه.
*һауеғ һанөғ каҙаһ*

يا ذئو. هئذئو. هاذ. هول.
*луһ ҙаһ уыҙыһ уыҙай*

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ح | ـح | ـحـ | حـ* | х |
| ه ە ه | ـهـ ـه | ـهـ | ە ه | һ |
| — | — | ـھ | — | ҡалын һ |
| ذ | — | ذ | ذ** | ҙ |

هول. ئايهئلئو قايهئلاى هيذگئر. هيلال حات ئوقئى.
*йыку тах лалиһ регҙиһ йалыһйак уылыһйа луһ*

ئاه - ئاه! ئەهئل حاتا ئوقئى.
*йыку атах леһә һа - һа*

Күреүегеҙсә, ـﻬـ ﻫ — h hүҙ, өләш башында ла, уртаһында ла, аҙағында ла яҙыла: هاذاق — һаҙаҡ, ئايهێلێو — Айһылыу, هێلە و هێن — һеләүһен, تە نبيه — тәнбиһ.

Ә яңғыҙ килә торған ﻩ ـﻪ — h бишенсе дәрестәге ﻩ ـﻪ — ә менән бер төрлө яҙылһа ла, ябыҡ ижектең аҙаҡҡы өнө булып килгәндә h итеп уҡыла: گێواه йәки گوا ه — гeyah, گر وه йәки گۆروه — гpyh, گۆناه йәки گناه — гөнаh, شاه — шаh h. б.

Был ﻩ ـﻪ -ләрҙең бер үк hүҙҙә ике-өс урында килеүе лә мөмкин. Был саҡта улар, ижектәр төрөнә ҡарап, h булып та, ә булып та уҡыла. Мәҫәлән: شاه وه لى — *Шаhвәли* (йәки *Шаhевәли*), شاه وه ليذه ر — *шаhвәлиҙәр* (йәки *Шаhевәлиҙәр*), شاه به ره ك — *Шаhбәрәк* (йәки *Шаhебәрәк*) h. б.

Был дәрестәге ـخ — х, бигерәк тә ـﻬ — h хәрефтәренең яҙылышына иғтибар итегеҙ. Уларҙы, алтынсы дәрестәге ـغ — ғ хәрефе кеүек, дөрөҫ, матур итеп яҙығыҙ.

**Эш.**

1. Ошо һөйләмдәрҙе уҡығыҙ:

ئەهێل «ئاه» تيپ قالدێ، سو رتان كولگه سومدێ.
مه ذكو ره هينهێذ يه شه ى ئا لێرمێ ؟
شاه ينشاه باتشالار باتشاهێ تيگه ن هوذ.

2. Был һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ:

شاه بال دا، شاه زادالا بێذ ذه ئشله ى.

بئذ ئه حه ئ ئر هئله وهئن هيره گه يگه ن
هيممه ت ئاعاى كيسه گئ حاتئندا هئذگه له هاعئنئشلئ
سه له م ئه يتكه ن ، سه له مه تلئك تئله گه ن .

## Туғыҙынсы дәрес — ٩ نسئ ده رئس

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ـو̇ | — | و̇ | و̇ | о |
| ـو̇ | — | و̇ | و̇ | ө |
| ـث | ـثـ | ثـ | ث | ҫ |

تۆرۆن، تۆرۆن. تۆرۆنمه.
*норот* *нөрөт* *әмнөрөт*

ئۆرۆن، ئۆرۆنما. تۆث.
*норо* *амноро* *ҫөт*

تاثتامال. بالاث. تۆرۆنباش. ئۆثته ل. ئيثكئ.
*ламатҫат* *ҫалаб* *шабнорот* *ләтҫө* *екҫи*

Һүҙ башында килә торған ئو، — о, ئۆ — ө һәр икеһе ике хәрефте: ئ менән ۆ -но ҡушып яҙала: ئۆذۆن، — оҙон, ئۆذاق — оҙаҡ, ئۆذۆك — өҙөк, ئۆلگۆ — өлгө һ. б.

**Эш.**

1. Ошо һүҙҙәрҙе уҡығыҙ:

ئون، ئۆن. ئۆن. ئوت، ئوت. ئۆت، ئۆتا. ئۆت. ئوته

تۆر، تور. توره. هوت، هوت. هۆت. ئۆذۆن.

2. Был һүҙҙәрҙе күсереп яҙығыҙ:

ئث، ئثلا و. ئوذوك. گولكه ى. ئوشو، تهپهشهك

ئوثتهلده ئاشا. سورئهئذ. هوثا. قثقاقهلهم.

3. Түбәндәге һүҙҙәрҙе ғәрәп хәрефтәре менән яҙығыҙ. Күл. Ҡул. Ҡором. Ҡол. Ҡалыу. Урт. Үрт. һөрҙөрөү. Төҙөлөш. Бөтөнөһө. Яҙыу. Китеү. Көтөүсе. Бөгөү. Өрҙөрөү. һөт. һут. һүт. Тиреҫ менән көлдө уңыш күтәреүгә файҙаланалар. Бөрө. Борон. Борғо.

## Унынсы дәрес — ١٠ نسى دهرس

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ـڭ | ـڭـ | ڭـ | * ڭ | Ң |
| ـچ | ـچـ | چـ | ** چ | Ч |

ئوڭ، ئوڭ. كوكثل. تيڭ.

*ңит леңцк ңү ңу*

زهڭگه ر. ئهڭگهمه. توڭ، كالاچ قالاهى بيك ئالنث.

*ҫыла киб ыһалак чалак ңут әмәгңә рәгңәз*

ۋلاد يۋاستوك چيتانان يئراقمى ؟ ئه چيرچيكتان ؟

*? наткичрич ә ? ымкарый нанатич котсавидалв*

Был хәрефтәрҙе яҙыу ҙур ғына оҫталыҡ талап итә. Ләкин һеҙ уларға оҡшаш хәрефтәрҙе яҙып күнеккәнһегеҙ инде.

**Эш.**

1. Ошо һөйләмдәрҙе уҡығыҙ:

نى ئيسئملى كيتاپ ئوقئيهئك ؟

کیتاپ توگێل، «چایان» ژورنالێن ئوقێیم.

هینێڭ ئەللە باشێڭ ئاوێرتامێ؟

یوق، ئاوێرتمای، بێلای ئێنا هێڭعاذاپ تۆرام.

2. Был һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ:

چاپایف ئۇفۇنۇ ئاقتارزان تاذارتقان. کیڭ کوکێل.

چکالف عەیرەتلێ، بەهلێوەن لیوتچیك. زەڭگەر کوك.

Шуның менән «Әлифба»ның төп өлөшө тамамланды. Хәҙер инде һеҙ иң һуңғы (1928 йылғы) орфография буйынса ғәрәп хәрефе менән яҙылған, баҫылған бөтә төр тексты уҡый алаһығыҙ, тип ышанырға кәрәк.

Был ышаныу һүҙҙә генә ҡалмаһын өсөн ошо беркетелгән өҙөктө уҡып сығығыҙ.

« باشقورتوستان »

1928 نسێ ییێل باشقۆرتۆستان ئۆزەك باشقارماهێ
ئۆزێنێڭ 3 نسێ سیسسێیەهێن ئێشسێلەر ئۆزەگێ
بولعان بیلاریت قالاهێنا بارێپ شوندا ئۆزعارزێ.
بێل سیسسێیەنێڭ قاراعان مەسئەلەلەرێ بۆتە
باشقۆرتۆستان ئێشسەن یالپێهێ ئۆسۆن هاناپ بۆتۆر-
گۆهۆز مۆهیم بولعانلێقتان، بێنێ ئەلبیتتە مەلێند ە

یاقترتئپ بارو که ره ك ئینئ ، له کین ،بئنئ ئۇفۇله سئق -
قان گه زیتته ر ئاشا ئشله و تیذ لئك منه ن مۇ مکین
بولماعانلقتان ، بیلا ریت قالاهئنڭ ئوذئنده بئر گه زیت
سئعارو مه سئه له هئ ئالعا قویئلدئ هه م شو ندو ق
سیسسئیه ئیسئمنه ن ئۇفۇگه تیلیعرام بیرئب، حه ر ئف
هه م نابو رشیك کیلتئرتئپ (بیلا ریتئنڭ ئو ذ ئنده گئ
حه رئف یئته رلئك توگل ئینئ ) « باشقۇرتۇستان» ئیسملئ
کسکه ی فارماتتا ئیکئ بیتلئ گه زیت سئعارئلدئ .

،بئنئڭ مۇحه رریرئ ت . که لیموللین بولئب، بارلئعئ
ئۇس نومیر سئقتئ .

بئندا سیسسئیه نئڭ مۇهیم قارارذارئنان ئالئنئپ
باشئلعان مه قه له له رذ ه ن باشقا تامئان قاتای کان-
تونئنا حاس ماتیریالدارذا کوپکئنه بیرلدئ . کانتونلئق -
تئڭ بۇته ،یۇرت باشقارمالارئنا، ئاوئل سه ویتته رئنه ،
ئوقو ئویذه رئند تاراتئلدئ . ،بئل گه زیتکه کوپکئنه
حۇکومه ت وه کیلده رئ قاتناشلئق ئیتتئله ر. بئر ئنسئ
هانئ 23 ئنسئ ئوکته بئرذه سئقتئ .

**Был өҙөк Төхфәт Йәнәбиҙең 1929 йылда сыҡҡан «Башҡорт ваҡытлы матбуғаты» тигән китабынан алынды. Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтәйек: бының исеме «باشقۇرتۇستان» бишенсе дәрестә телгә алынған «ҡырҡма шрифт» өлгөһө була ала.**

Башҡорт телендәге тәүге машинкаларға ла ошо «ҡырҡма шрифт» ҡуйылды. Сөнки ул шрифт хәреф шәкелдәре һанын аҙайта. 1924—1925 йылдарҙан башлап машинкала баҫылған текстарҙа ул шрифтты йыш осратырһығыҙ.

«Әлифба»ның **икенсе өлөшөнә** күсәйек.

Һуңғы ваҡыттарҙа яҙылған документтарҙы, баҫылған китаптарҙы уҡыу сағыштырмаса еңел булһа ла, йылдар, быуаттар төпкөлөнә алыҫыраҡ ингән һайын, уларҙы уҡыу ауырлаша барасаҡ. Шуға күрә, элекке, хатта боронғо ҡомартҡыларҙы уҡырға өйрәнер өсөн «Әлифба»ның икенсе өлөшөн, йәғни үтелгән дәрестәрҙәге ҡайһы бер хәрефтәргә бирелгән иҫкәрмәләрҙе, берәм-берәм ҡарап, өйрәнеп сығайыҡ.

**Беренсе** дәрестәге тәүге иҫкәрмә (*) һүҙ башында килә торған элекке آ —**а** хәрефенә ҡағыла (32-се битте ҡарағыҙ). Был хәреф һүҙ эсендә йә аҙағында яҙыла торған яңғыҙ ا —**а**-ға мәт (~) тамғаһы өҫтәп эшләнгән. 1928 йылда раҫланған алфавитта ул آ алынмаған. Уның урынына, белеүебеҙсә, ءا —**а** хәрефе эшләнгән.

Икенсе иҫкәрмәлә (**) һүҙ элекке башҡортса, татарса яҙыуҙарҙа йәки төрки яҙыуҙарында оҙаҡ ваҡыт ҡулланылған ҡаты ط **т** тураһында бара. XX быуат баштарында яҙылған бер шиғыр-ҡулъяҙмала (Әбйәлил районы, Әбделгәзе ауылы Шафиҡ Әминев яҙыуында), мәҫәлән, ошо һүҙҙәр ط менән яҙылған: *тырыш* — طرش (трш), бер *бот һоло* — بر بوط هولی (бр бот һолы), *ылау аты* — الاو آطی (ылау аты), *утыҙ йәш* — اوطض یاش (утҙ йаш),

алтын-көмөш — آلطن كومش (алтн күмш), йорт-мал — يورط مال (юрт мал), артыш — آرطش (артш), ҡотолоу — قوطلو (ҡутлу), аҡтыҡ — آقطق (аҡтҡ), шарт — شرط (шрт) һ. б.

Күреүегеҙсә, һүҙ һайын тиерлек кәрәкле һуҙынҡылар ҡуйылмаған. Ошо уҡ иҫкәрмәлә һеҙ шулар кеүек үк һуҙынҡыһыҙ, мәҫәлән, طاهر — Таһир, وطن — ватан, طبيعت — тәбиғәт һүҙҙәрен күрерһегеҙ.

Ә ғәрәптән беҙгә ингән был һүҙҙәрҙәге ул етешмәгән һуҙынҡыларҙы ғәрәп яҙыуы үҙе иһә тартынҡыларға диакритик тип аталған тамғалар ҡуйыу юлы менән барлыҡҡа килтерә.

Был тамғалар башҡортса, татарса яҙыуҙа ҡуйылмаһа ла, боронғоса йәки ғәрәпсә уҡып күнеккән кешеләр яҙыуҙы уҡыған саҡта һүҙҙәге тартынҡыларға шул диакритик тамғаларҙың тейешлеһен, йәғни һуҙынҡыларҙы, күңелдән генә ҡуя, өҫтәй барғандар.

Ниндәй тамғалар һуң улар? Шуларға туҡталайыҡ. Улар күп түгел.

Беҙҙәге **ә, а** һуҙынҡыларын белдерә торған диакритик тамға фәтхә ( ـَ ) тип атала. Ул тартынҡы хәрефтең өҫтөнә ҡуйыла: لَ —**лә**; беҙҙәге **и, е** һуҙынҡыларын белдерә торған диакритик тамға кәсрә ( ـِ ) тип атала. Ул тартынҡы хәрефтең аҫтына ҡуйыла: لِ —**ли, ле**;

Беҙҙәге **ө, о** һуҙынҡыларын белдерә торған диакритик тамға замма ( ـُ ) тип атала. Ул тартынҡы хәрефтең өҫтөнә ҡуйыла: لُ —**лө**;

ә һуҙынҡының ҡатнашлығы булмаған йәки ябыҡ ижек аҙағында килә торған тартынҡыны белдергән диакритик тамға сәкен ( ˚ ) тип атала. Ул да хәрефтең өҫтөнә ҡуйыла: لْ —л.

Быларҙан тыш, бер үк хәрефте икәү йәки ҡуш итеп әйттерә торған диакритик тамға бар. Быныһы тәштит ( ّ ) тип атала. Ул хәреф өҫтөнә ҡуйыла: لّ —лл.

Тәштиттең үҙенә лә фәтхә, кәсрә, замма тамғаларының (йәғни хәрәкәләрҙең) береһе ҡуйыла. Шул саҡта тартынҡыға тейешле һуҙынҡы өҫтәлә: لَّ —ллә, لِّ —лли, لُّ —ллө.

Хәҙер ошо диакритик тамғаларҙы ҡуйып, бер нисә һүҙ уҡып ҡарайыҡ: فَقَطْ —фәҡәт, وَطَنْ —ватан, مَجْلِسْ —мәжлес, اَوَّلْ —әүүәлө, دِقَّتْ —диҡ-ҡәт, تَنَفُّسْ —тәнәффөс, مُدَرِّسْ —мөдәррис, مُقَدَّسْ —мөҡәддәс, مُعَلِّمْ мөғәллим, تَوَكُّلْ тәүәккәл, تَكَبُّرْ тәкәббер.

Элекке китаптарҙы йәки ҡулдан яҙылғандарҙы уҡығанда һеҙгә һүҙҙең иң һуңғы хәрефе (ғәҙәттә ا —а, ة —т) өҫтөнә ҡуйылған ҡуш фәтхә ( ً ) тамғаһы осрар. Был тамға һүҙгә **-ән** йәки **-ан** ялғауын өҫтәй ҙә уны рәүешкә әйләндерә. Миҫалдар: عموماً —ғөмүмән, خصوصاً —хосусан (айырыуса, бигерәк тә), مثلاً —мәҫәлән, امانةً —аманәтән (аманат итеп), قاعدةً —ҡағидәтән (ҡағиҙә рәүешендә) һ. б. Ҡуш

фәтхә ҡуйылмағанда ла ул һүҙәргә **-ан, -ән** ялғап уҡырға күнеккәндәр.

* һүҙ башында ғына килә торған элекке ا‎ -**а**.

آت. آق. آرقا. آرتتا. آققا قارا. آى .

*йа арак акка аттра акра ка та*

** Элекке яҙыуҙарҙағы ҡалын йәки ҡаты ط -**т**.

طار. طاراق. قاطا. آطا. آقطارا . آرطش.

*ш(ы)тра аратка ата атак карат рат*

وطن. طاهر. اورط. طبيعى. طبيعت.

*т(ә)ғиб(ә)т иғиб(ә)т тру р(и)һат н(а)т(а)в*

**Эш.**

1. Ошо һүҙ, һөйләмдәрҙе уҡығыҙ:

قارا آت . قارت آت. آتتار.

طاراط. آق طاراق طاراطا.

2. Түбәндәге һүҙәрҙең һәр береһен өсәр юл итеп, күсереп яҙығыҙ:

آق. آرقا. آرتتق. طاقطا. طاراط. طاش.

3. Был һүҙәрҙе сағыштырығыҙ:

طاو. طاع. داع. آت. آطْ. ئات. طش. تتش.

وطن. واتان. طبيعى. تەبيعى. اورط. ئورت.

طاهر. طاهير. تاهير. طبيعت. ته بيعه ت.

**Икенсе** дәрестәге ﺋ ، ﯔ хәрефтәренә бирелгән иҫкәрмәне өйрәнер алдынан тәүҙә ул дәрестең 11-се биттәге аңлатмаһын ҡарайыҡ. Унда һүҙ эсендәге өләштәр башында ﺋ хәрефенең яҙылыуына миҫал килтереп булмағайны. Сөнки өйрәнелгән хәрефтәр етешмәй ине. Хәҙер уға миҫал итеп: رەئيس — *Рәис*, نائيله — *Наилә*, سائيمه Саимә кеүек исемдәрҙе, шулай уҡ بەئلدەو — бәэлдәү һүҙен дәфтәрегеҙгә өҫтәп яҙып ҡуйырға мөмкин.

Бынан тыш, ﺋ хәрефе һүҙ эсендә ул һүҙҙәге ҡалын йәки нәҙек һуҙынҡыны үҙенән һуң килгән тартынҡынан айырып, өҙөп әйткәндә яҙыла. Хәҙерге орфография буйынса ундай урындарҙа **ь** йәки **ъ** ҡуйыла: тәьҫир — تەئثير , маъмай — مائماى , мәсьәлә — مەسئەله , тәьмин — تەئمين , Мөъминә — مؤمينه һ. б.

Ә ғәрәпсә ике һүҙ араһында торған һәмзә ( ﺀ ) , хәрефкә әйләнеп, **и** тип уҡыла: ترجمهء حال — тәржемәи хәл (биография), بندهء فقير — бәндәи фәҡир (ярлы кеше), مدرسهء عاليه — мәдрәсәи Ғалиә (Ғалиә мәҙрәсәһе) һ. б.

Хәҙер икенсе дәрестең иҫкәрмәһенә киләйек.

Һүҙ башында ғына килә торған элекке ا — **э, ы.**

اش. اذ. اشق. ارذن. المه ك. الك. انه. ام.

*шэ ҙэ ҡ(ы)шы н(ы)ҙры кәмлә к(е)лә энә мы*

ايت. ايكمه‌ك. ايل. ايتـــك. اوى. اوت. اوق.

*ку ту йу к(е)ти ли кәмки ти*

Аңлашылыуынса, был иҫкәрмәлә элекке яҙмаларҙағы ا — **э, ы** күрһәтелгән. Быны беренсе дәрестең төп өлөшөндә өйрәнелгән, һүҙ эсендә килә торған ا —**а** менән бутарға ярамай. Иҫкәрмәлә әйтелгән был ا —**э, ы** һүҙ башында ғына килә: اش —эш, اذ —эҙ, اركت —эркет, اث —ыҫ, ام —ым, اذان —ыҙан, اشق —ышыҡ, اذعش — ыҙғыш, الث —ылыҫ, الاش —ылаш һ. б.

Элекке ваҡытта, берҙән, һуҙынҡыларға ҡалынлыҡ билдәһенең ҡуйылмауы, икенсенән, ۆ ێ ۏ һуҙынҡыһының булмауы уҡыу-яҙыу өсөн ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙырған. Бына, мәҫәлән, эреү, ырыу һүҙҙәре икеһе лә ارو рәүешендә, хатта үҙ, уҙ, ыуыҙ һүҙҙәре өсәүһе бер төрлө — اوذ рәүешендә яҙылған. Ә иң һуңғы (1928 йылғы) орфографияла улар ئوذ (үҙ), ئوئذ (ыуыҙ) рәүешендә яҙылалар. Элекке ваҡытта, мәҫәлән, ыуыу һүҙе اوو формаһында яҙылған. Ундайҙар байтаҡ осрар.

Был ا —**э, ы** өнө баштағы ижектә ي менән ҡушылһа, اي —**и** барлыҡҡа килә: ايل —ил, اير —ир, ايرك —ирек. Ул و менән ҡушылһа, او —**у, ү**, хатта **о, ө** өндәрен барлыҡҡа килтерә: اوراق —ураҡ, اون —ун, اوت —ут, үт, от, өт, اوذ —уҙ, үҙ, өҙ.

Иҫкәрмәлә килтерелгән اشق —ышыҡ, الك — элек, ايتك —итек кеүек һүҙҙәрҙә ێ һуҙынҡы-

һының яҙылмауы элекке ваҡытта ул һуҙынҡының ҡулланылмауына бәйләнгән.

Ошо уҡ иҫкәрмәлә алынған المه ك — элмәк, ايكمه ك — икмәк кеүек һүҙҙәрҙәге ه — ә өндәренең, و اقت ваҡыт кеүек һүҙҙәрҙәге ا — а, ـُ — ы, е өндәренең ҡулланылмаған саҡтары булған. Ул һүҙҙәр الملك — элмк, ايكمك — икмк, و قت — вкт тип яҙылған. Һуҙынҡыһыҙ яҙылған бының шикелле һүҙҙәрҙең иге-сиге юҡ. Мәҫәлән, мәктәп урынына مكتب (мктб), Зәйнәп — زينب (Зинб), хәбәр — خبر (хбр), ҡәләм — قلم (клм), мәҙәниәт — مدنيت (мднит) тип яҙылған һ. б. Һеҙ уларҙы элекке китаптарҙа, боронғо яҙыуҙарҙа, контекст ҡушҡанса аңлап, үҙегеҙҙән һуҙынҡылар ҡушып уҡырға тейеш булаһығыҙ.

Күплек, килеш ялғауҙарында ла элек ه — ә, ا — а яҙылмаған: مكتبلر — мктблр (мәктәптәр), آتلر — атлр (аттар), صيرلر — сирлр (һыйырҙар) йәки صعرلر — сғрлр (һыйырҙар); سو ر گندن — сүргндн (һөргөндән), اوفادن — Уфадн (Өфөнән) һәм башҡалар. Йыш ҡына ҡалын һүҙҙәргә нәҙек ялғауҙар ялғанған: او تراوغه — утрауға, يالانده — яландә һ. б.

**Эш.**

1. Был һүҙҙәрҙе сағыштырығыҙ:

اش . ئش . اری . ئری . اوق . ئو ق . اوی . ,ئو ی .

ات . ئت . انه . ئنه . ايار . ئيهر . ارم . ئرئم .

2. Был һүҙҙәрҙе уҡығыҙ ҙа күсерегеҙ:

الاو . ايل . ايكمه‌ك . ايت . ايتئك . املاو . ئملاو .

**Дүртенсе** дәрес иҫкәрмәһе ҡайһы бер һүҙҙәрҙең, шулай уҡ кеше исемдәренең аҙаҡҡы хәрефе булып килгән ى -нең **ә, а** итеп уҡылыуын әйтә. Быға ошо миҫалдарҙы килтерергә мөмкин: معنى — мәғәнә, دعوى — дәғүә, اعلى — Әғлә, حتى — хатта, يحيى — Яхъя, موسى — Муса, عيسى — Ғайса, مصطفى — Мостафа һ. б.

**Бишенсе** дәрес иҫкәрмәләренә күсәйек.

*Элек ҡайһы берәүҙәр گ —**г** хәрефен ڭ рәүешендә алып, توگل һүҙен توڭل тип, سزگه һүҙен سزڭه тип яҙғандар. Икенсе берәүҙәр уны ک рәүешендә алып, بزگه һүҙен بزكه тип, ә ئه‌گه‌ر ، مه‌گه‌ر һүҙҙәрен اكر ، مكر тип яҙғандар.

** Һүҙ башында килә торған элекке ا — **ә**. Миҫалдар: امير (Әмир), اكرن (әкрен), اكرم (Әкрәм), اثر (әҫәр), اگر (әгәр) һәм башҡалар.

*** Фарсы теленән ингән бер нисә һүҙҙә был ه хәрефе **и** булып уҡыла. Миҫалдар: بلكه (бәлки), چونكه (чөнки), ياكه (йәки), گوياكه (гүйәки) һ. б.

**Эш.**

1. Ошо һүҙҙәрҙе уҡығыҙ:

ئه‌حلەق . ئەذەبى . ئەثەر . ئەذئر . قەيوم .

2. Был һүҙҙәрҙе сағыштырығыҙ:

ابى . ئەبئى . ادب . ئەذەپ . ايبر. ئەيبئر. ارم .
ئەرئم .

3. Түбәндәге һүҙҙәрҙе күсереп яҙығыҙ:

ئەگەر . ئەفليسون . ئەذەبيەت . ئەذهەم . مەريەم .

Был өс иҫкәрмәнең тәүгеһендә өҫтәп аңлатырлыҡ нәмә юҡ.

Ә икенсе иҫкәрмә буйынса шуны белеп китәйек: ундағы | — ә үҙенең яҙылышы яғынан беренсе дәрестең төп өлөшөндәге | — **а**-ға, икенсе дәрестең иҫкәрмәһендәге | — **э, ы**-ға оҡшаған. Ләкин | — **а** һүҙ эсендә генә килә, ә | — **ы, э** менән | — **ә** һүҙ башында киләләр. Шул уҡ ваҡытта улар менән башланған, бер үк төрлө яҙыла торған һүҙҙәр күп түгел. Мәҫәлән, әҙ, эҙ һүҙҙәрен элек

از рәүешендә, әсеү, эсеү һүҙҙәрен اسو рәүешендә, әрәм, әрем, ырым һүҙҙәрен ارم рәүешендә яҙғандар. Һөйләмдең мәғәнә барышына ҡарап, быларҙың ҡайһы һүҙ икәнен еңел айырып була.

Ә өсөнсө иҫкәрмәгә ( ⁂ ) шуны өҫтәргә кәрәк. Нөктәһеҙ ه ـه ике нөктәле ة ـة -нән ныҡ айырыла. Нөктәле ة ـة беҙгә килеп ингән ғәрәп һүҙҙәрендә ت — **т** итеп уҡыла. Китаптарҙа һеҙгә, мәҫәлән, محبة — мөхәббәт, صحة — сихһәт, تحفة — Төхфәт, مناسبة — мөнәсәбәт, قوة — ҡеүүәт һүҙҙәре осрар. Ғәрәптәрҙең үҙҙәрендә иһә ة ـة хәрефе менән мөәннәс

(йәғни женск. род) исем һүҙҙәрендә, өҫтөнә тәнүин ( ٌ ) тамғаһы ҡуйып яҙыла. Был тәнүин ( ٌ ) һүҙгә **-н** йәки **-өн** ялғауын өҫтәй. Мәҫәлән, دولةٌ — дәүләтөн, كاتبةٌ — катибәтөн һ. б.

**Алтынсы** дәрес иҫкәрмәләренә ни ҙә булһа **өҫтәп** аңлатыуҙың кәрәге юҡ. Был иҫкәрмәләргә миҫалдар ҙа байтаҡ бирелгән.

*Элекке яҙыуҙарҙа осрай торған ҡаты **ғ**— غ ـغـ ـغ غـ

آلغا. ياذغان. بولغار خلقىٔ. باغو. اوغلم.

*м(ы)лғу у(ы)ғаб ык(ла)х рағлоб нағзай ағла*

** Элекке яҙыуҙарҙа осрай торған ҡалын **с**— ص صـ ـصـ ـص

صالاواط. صلواط. صرخاو. ناصيب. نصيب.

*бис(а)н бисан уахр(ы)с тау(а)л(а)с тауалас*

آيصلو. آقصا. صونطر صيصلا (*февраль*). صاف. صحنه.

*әнх(ә)с фас алсис р(о)тнос аска ул(ы)сйа*

صغر (*һыйыр*). تصوير. مقصد. صبر. سابر.

*рыбас р(ы)б(а)с д(а)ск(а)м риус(а)т р(ы)ғ(ы)с*

**Эш.**

1. Түбәндәге һүҙҙәрҙе сағыштырығыҙ:

سالاوات. صالاواط. سامات. صمد.

ماقسات. مقصد. تاسوير. تصوير.

ناسيپ. نصب. سوٚنتوٚر. صونطر.

سينٮُف. صنف. سه حنه. صحنه.

2. Ошо һүҙҙәрҙе күсереп яҙығыҙ:

صالاواط باطر. صاقما طاش. صاقصاول.

**Етенсе** дәрестең беренсе иҫкәрмәһендә нәҙек **җ**— ج хәрефенә миҫалдар килтерелә. Ә икенсе иҫкәрмәлә **в**— ۋ урынына ф— ف яҙылыуы әйтелә. Уны һеҙ ғәҙәттә ябыҡ ижектәрҙә осратырһығыҙ. Мәҫәлән: актив ئاكتيف совхоз — سافحوز , Закиров — زاكيروف , ләкин زاكيروۋا — Закирова һ. б.

*Элекке яҙыуҙа осрай торған нәҙек **ж** — ج ﺠ ﺟ ﺞ

نهجيب. نجب. رهجهب. رجب. خوجا. جه مه عه ت.

*тәғәмәж ажух б(ә)ж(ә)р бәжәр б(и)ж(ә)н бижән*

**Был ۋ —**в** урынына ҡайһы бер осраҡтарҙа ف — ф яҙғандар.

**Һигеҙенсе** дәрестең беренсе иҫкәрмәһендә ҡаты خ — **х**-ға миҫалдар бар. Икенсе ике иҫкәрмәләге ظ ، ض хәрефтәре беҙҙә һәр ерҙә тиерлек **з** итеп уҡыла: ضرر — *зарар,* امضا —*имза,* ظريف —Зариф һ. б. Уларҙан тыш, ғәрәптән беҙгә ингән, мәҫәлән, ذات —ҙат, ذاكر —*Ҙакир,* ذهن —*ҙиһн* һүҙҙәре лә беҙҙә *зат, Закир, зиһен* тип, **з** менән әйтелә.

*Элекке яҙыуҙа осрай торған ҡаты **х**— خ ﺨ ﺧ ﺦ

خط. خان. خاص. خطا. خصوصی. مخصوص. خیال.
*т(а)х нах сах ат(а)х исус(о)х сусх(а)м лай(ы)х*

** Ғәрәп, фарсы һүҙҙәрендәге ҡаты ҙ — ض ضـ ـضـ ـض

ضرر. ضه‌رار. ضرور. ضروری.
*р(а)р(а)ҙ раразҙ рур(а)ҙ ирур(а)ҙ*

امضا. انقراض. ضغیف.
*аҙми ҙар(и)кни фиғ(а)ҙ*

** Ғәрәп, фарсы һүҙҙәрендәге ҡаты ҙ — ظ ظـ ـظـ ـظ

ظریف. ظالم. ظلمت. ظاهر. انتظار. حافظ
*фир(а)ҙ м(и)лаҙ т(ә)мл(о)ҙ р(и)һаҙ раҙ(и)тни ҙ(и)фах*

**Эш.**

Был һүҙҙәрҙе сағыштырығыҙ:

خط. حات. خاص. حاس. خطا. حاتا.

خصوصی. حوٗسوسی.

ضرار. زارار. ضرور. زارور.

امضا. ئیمزا. ضعیف. زه‌عیف.

ظریف. زاریف. ظالیم. زالیم. ظاهر. زاهیر.

انتظار. ئینتیزار. حافظ. حافیز.

**Туғыҙынсы** дәрескә иҫкәрмә урынына ошоно өҫтәйек: Элекке ваҡытта был дәрестәге وٗ — о, ө өндәренә

ярашлы хәрефтәр булмаған. Шуның өсөн, мәҫәлән, ойоҡ һүҙе او یوق (уюҡ) тип, орсоҡ — او رسوق (урсуҡ), Мохтар — محتار (Мхтар), өй — اوی (уй, үй) йәки ایو (иү), Өмөт — امید (эмид), мөмкин — ممکین (ммкин) тип яҙылған һ. б.

Ҡулдан яҙылған ҡайһы бер ҡомартҡыларҙа ث —ҫ хәрефенең ش рәүешендә яҙылыуы ла бар. Мәҫәлән: بو تمه ش توکه نمه ش — бөтмәҫ-төкәнмәҫ, کوزی کو رمه ش بولدی — күҙе күрмәҫ булды һ. б. Һүҙ аҙағындағы ябыҡ ижектә ошо уҡ ث —ҫ урынына ذ —ҙ яҙыу ҙа булыр: تاماغنا تابماز آذق — тамағына тапмаз аҙыҡ, йәки آق اوثنده بر قارانی بلمه ز ئیمدی — аҡ өҫтөндә бер ҡараны белмәз инде һ. б.

**Унынсы** дәрестә ڭ —ң-гә бирелгән иҫкәрмәнең тәүгеһенә килтерелгән نك —ң варианты фарсы яҙмаһына эйәреп алынғандыр, күрәһең. Сөнки фарсыла, мәҫәлән, аһәң һүҙе — آهنك , сәрһәң — سرهنك рәүешендә яҙыла.

Шул уҡ иҫкәрмәләге ڭ —ң-дең икенсе варианты ک — к өҫтөнә бер нөктә ҡуйып, ڮ рәүешендә эшләнгән.

Бындағы икенсе иҫкәрмәлә چ —ч урынына элек ج — ж яҙылыуы әйтелә. Быға миҫалдар күп булһа ла, ошолар менән сикләнәйек: ر و سجه د ه ن — русжадан тәржемә, ترکجه عز یته — төрөкжә газета, کیله جه ک زامان — киләжәк заман һ. б.

*Элекке ҡайһы бер яҙыуҙарҙа осрай торған **ң** ـنک نک نك

آننك آرطنسا. ازله كونكلنك سویگه ننی. اینه یننك كنكاشی

*ешәң(ә)к ң(е)нйәни еннәгйөс ң(е)л(е)ңүк әлзэ асн(ы)тра ң(ы)на*

*Ошондай ҙа ݣ —**ң** булған: بلمه گه ننݣ بله گی طنس (белмәгәннең беләге тыныс). آتكنی قوا توش (атыңны ҡыуа төш) һ. б.

** Был چ —**ч** урынына элек йыш ҡына ج —**ж** яҙғандар.

Был дәрестә бүтәнсә өҫтәп аңлатырлыҡ ҡыйынлыҡтар юҡ.

Шулай итеп, «Әлифба»ның бөтә дәрестәрен, бөтә иҫкәрмәләрен өйрәнеп сыҡтыҡ. Хәҙер һеҙ ғәрәп хәрефе менән баҫылған һәр төрлө китап, газета, журналдарҙы йәки ҡулдан яҙылған бөтә төр ҡомартҡыларҙы уҡырлыҡ хәлгә килгәнһегеҙҙер.

Билдәле, бында әле әйтелеп бөтмәгән ҡыйынлыҡтар ҙа ҡалғандыр. Уларҙы асыу, хәл итеү, еңеп сығыу һеҙҙең үҙ тырышлығығыҙға бәйләнгән. Асҡыс ҡулығыҙҙа.

Әйҙәгеҙ, үҙебеҙҙе һынап, күпме белеүебеҙҙе тикшереп ҡарайыҡ.

«Әлифба»ның **өсөнсө өлөшөнә** күсәйек. Был өлөштә уҡыр өсөн текстар бирелгән.

## Күнегеүҙәр

Бында ла еңелдән ауырға барайыҡ. Бының өсөн тәүҙә «Әлифба»ның төп өлөшөндә өйрәнелгән имләгә (орфографияға) кире ҡайтайыҡ. Ә унан һуң боронғоға: башта яңы имләгә, шунан урта, иҫке имләгә табан китербеҙ.

һеҙ хәҙер аңлатманың 27-се битен асып, ундағы «باشقۆرتۆستان» тигән өҙөктө ҡабатлап уҡығыҙ. Ҡабатлауҙан һис ҡасмағыҙ. Сөнки ҡабатлау арҡаһында ғына белем күңелгә нығыраҡ һеңә, оҙаҡ һаҡлана.

Был юлы һеҙ ул өҙөктө, моғайын, тиҙерәк тә, еңелерәк тә уҡығанһығыҙҙыр, өҫтәп яңы нәмәләр ҙә белгәнһегеҙҙер.

Юғарыла беҙ ғәрәп хәрефе менән машинкала баҫылған материалдар осраясағын әйтҡәйнек. Уларҙың бер-ике үрнәге менән ошонда танышып үтеү бер ҙә зарар итмәҫ.

Түбәндә уҡыласаҡ документтың аныҡ датаһы юҡ. Шулай ҙа уның 1928 йылғы орфография ҡабул ителгәнсе йәки ул үҙләштерелгәнсе яҙылғанлығы күренеп тора. Ул — ВЛКСМ-дың Тамьян-Ҡатай канткомының түбәндәге ячейкаларға яҙған хаты. Шуның ошо өҙөгөн уҡығыҙ.

6 – يورت سه ياسى ئاڭ بلم تاراتو كه ميته تنٔه ،
ئاول يه چه يكه له رنٔه، زادانيالار بيرو يولێ منه ن نازان
كامسامولدارذێ ليكپونكتتارعا جاب ئيته رگه . ئورندارذاعێ
كاپيراتسيا پراۋلينيه له رێ منه ن هۆيذه شب باتراك، باترا-
چكالارعا ماددى يارذام كورهه تو ئشن قويو، شولايوق
باتراكتارذێ يۆرگه ن حوجالارێ منه ن هۆيذه شب، ئالارعا
(باتراكتارعا) ليكپونكتتارعا يۆرۆرگه مۆمكيندك تابو.
7 – يه چه يكه له رذه سه ياسى توگه ر ەكته ر ئالب
بارو ئۆسۆن، هه ر يه چه يكه كامسامولدارنٔڭ تۆرمۆشن هه م
ئوسلوۋيالارن نقلاب ئۆيره نو، يه چه يكه له ر ياننٔدا بولعان
كۆسته رذێ دۆرۆث حيسابقا ئالو هوڭندا ئشتێ شول. نيگذ-

ذه نقلیٔ پلان منه ن باشتارغا، که ره کتیٔ ئوقو ئه سبابتاریٔ حه ذرله و ئشئنه کرشرکه، سه یاسی توگه ره کته رذه ن ئوذ واقتندا نه تیجه له ر سغار رغا.

8 – یۇرت و. ل. ک. سـ. م. که میته تیٔ بۇتۇن بولغان مۇمکیندکته رذه ن فایذالانب کامساموِلدارذڭ باتراک یارلیٔ قاتلامن کالحوزلارغا تارترغا، کالحوز پراۋلینیه له ریٔ منه ن ئاڭلاشو ئاشا، باتراک یارلئلارذیٔ کالحوزلارغا ئالو ئوسلو- ۋیاهن یگله یتو قه ذه رهن بولدر رغا تییشلیٔ.

Fәрәп хәрефе менән башҡортса һүҙҙәрҙе әйтелгәнсә яҙыу өсөн аҙмы-күпме мөмкинлек булһа ла, рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙәге **е**, **о**, **ю**, **я** һуҙынҡыларын, шулай уҡ **ц**, **щ** тартынҡыларын дөрөҫ яҙыу мөмкинлеге юҡ. Ошо хаттарҙан күренеүенсә, мәҫәлән, бюро һүҙе بۇيۇرا (бойора) тип, коллектив — کاللیکتیف (калликтиф), комсомол — کامساموِل (камсамул), совет — سه ویت (сәвит), конференция — که نفیرینسیه (кәнфиринсиә), доклад — داکلات (даклат), кооперация — کاپیراتسیا (капиратсиа), комитет — که میته ت (кәмитәт), колхоз — کالحوز (калхуз) тип яҙылған.

Хәҙер шул уҡ канткомолдың ауылдарҙағы пионер отрядтарына яҙған хатынан бер өҙөк уҡығыҙ.

5) قذل ئارمیالا بولغان کشئله رذڭ بالداریٔ منه ن کیسه له ر یاهاب ئاندا قذل ئارمیانان یۇرۇب قایتقـان کشیٔ بولها، ئاڭارذان قذل ئارمیا تۇرمۇشۇن هه م 18-19

نسیٔ یلدارذا بولعان هوعشتارذڭ تاریحتارن هوٚیذەتکذ.

6) ئەترەت یینالشندا قذل ئارمیستنیٔ ساقرب،
حەذرگیٔ واقتداعیٔ ئشسی کرەشتیەن قذل ئارمیاهننڭ
حەذرگیٔ کوٚندەگیٔ بورسیٔ حاقندا بیسیدا یاهاعذ.
هوعش عیلمیٔ ئوٚیرەنو، ئیلدیٔ هاقتاو ئشیٔ بذذڭ سەویت-
تەر سایوزندا برنسیٔ ئورندیٔ توتا. کورەهنگذ، سیت
ئیل کاپیتالیستاریٔ بذگە، بذذڭ یارذیٔ حالق منەن هو-
عشقا ئاسقتان ئاسق حەذرذەنە.
بذذڭ ئشسیٔ کرەشتیەن قذل ئارمیاهیٔ و. ک. پ. (ب)
پارتیاهیٔ یولباشسلعیٔ ئارقاهندا هیستەیگلمەشتک بر
کوس. مگەر میللیونلاب قوربانلار ئاشا ئالعان ئوکتەبر
ریوالیوتسیەهن ئولنق هاقتای. شونڭ ئوٚسوٚن بوتەیەش
پیئانیرذار هەر بر ئورندا کاممونیست ئاعایذارنا یار-
ذامعا حەذرلەنرگە هەم قذل ئارمیا منەن نقتیٔ
بەیذەلشتە بولورعا تییشتەر.
پیئانیر! قذل ئارمیاعا یاقن یوروب، شونڭ ئارقلیٔ
هوعش عیلمن ئوٚیرەن!

Был хат 1928 йылдың башында ебәрелгән.

Оҙон ғына булған был ике хатты бер-береһе менән сағыштырғанда, һуңғыһы яҙылыш яғынан да, машинкала баҫыу оҫталығы яғынан да тәүгеһенән өҫтөнөрәк тора булһа кәрәк. Ә рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙа алмау — ғәрәп алфавитының етешһеҙлеге ул. Был өҙөктә

лə, мəçəлəн, *пионер* һүҙе — پیئانیر (пианир) тип, отряд — ئەترەت (әтрәт), армия — ئارمیا (армиа), беседа — بیسیدا (бисида) тип, бюро һүҙе — بیورا (биура) тип, Союз — سایوز (Сайуз) тип, революция — ریوالیوتسیه (ривалуитсиә) тип яҙылған һ. б.

Хәҙер **яңы имлә** менән яҙылған бер өҙөктө алайыҡ. Яңы тип йөрөтөлгән был имлә XX быуат баштарында эшләнгән. Ул имлә нигеҙендә татар телендә бер ни тиклем әҙәбиәт донъя күргән.

Һеҙ уҡыясаҡ түбәндәге өҙөктәр Ҡ. З. Әхмәровтың «Башҡорт яҙыуы тарихынан» исемле китабынан алынды.

ئوٓقیتوٓ ئششد بلمن ئمللّه نیچه یلدان بیرلد ما-
تاشقانلغمدان کوٗبدن بیرلد بوٓ کیمچلکلرند کوٗره
کیلدم، یازوٓ چلا رببزنث یازوٓلارن، تتل توٗزوچد-
لربزننك توٗتقان یوٓللارن تیکشره کیلدم. «صرف
قاعده لرننك» ئوزمه بیك کیره کللرن گنه ئارا-
لاربندان ئیك یاخشلارن غنا جیا کیلدم.

Эйе, ҡатмарлы ғына булған был яңы имлә. Унда һуҙынҡы өндө белдергән хәрефтәр урынына диакритик тамғалар ҡулланылған.

Һүҙ башында килә торған ә йәнәш ике мәркәскә һәмзә ( ءْ ) менән фәтхә ( َ ) ҡуйып ئَ ә яһалған: ئَللّه — әллә. Шул уҡ ваҡытта ә өнөн бирә торған ه ە үҙе лә алынған: کوره — күрә, کیرەك — кирәк, گنه — генә. Һүҙ йәки өлөш эсендә килә торған

ә мәркәскә фәтхә ( ـَـ ) ҡуйып ـَـ эшләнгән: بِلَّن —белән.

һүҙ башында килә торған **и** йәнәш ике мәркәскә һәмзә ( ـٔـ ) менән кәсрә ( ـِـ ) ҡуйып ئِـ эшләнгән: ئِيك —иң. һүҙ йәки өләш эсендә килә торған **и** мәркәскә кәсрә ( ـِـ ) ҡуйып ( ـِـ —и) яһалған: نِچِه —ничә, بِيرلِه —бирле, بِيك —бик.

һүҙ башында килә торған **э** өнө йәнәш ике мәркәскә һәмзә ( ـٔـ ) менән замма ( ـُـ ) ҡуйып ئُـ эшләнгән: ئُش —эш. Ә һүҙ эсендәге **э** мәркәскә замма ( ـُـ ) ҡуйып ( ـُـ ) яһалған: تُل —тел һ. б.

Оҙон әйтелешле **у** өнө و өҫтөнә мәт ( ـٓـ ) ҡуйып وٓ эшләнгән: بوٓ —бу. يازوٓ —язу, يوٓل —йул.

**о** өнө و өҫтөнә ҡалынлыҡ ( ـٰـ ) билдәһе ҡуйып ( وٰ —о) яһалған: توٰتقان —тотҡан.

**у** өнө лә, **ө** өнө лә و өҫтөнә замма ( ـُـ ) ҡуйып وُ у, ө эшләнгән: كوُب —күп, توُزَتو —төзәтү һ. б.

Был имләлә тартынҡыларға ҡалынлыҡ билдәһе ҡуйыу кағиҙәһе юҡ. Ә ҡалын **ы** булдырыр өсөн һәр урында тейешле мәркәстең өҫтөнә замма ( ـُـ ) ҡуйып, мәркәс аҫтына ҡалынлыҡ ( ـٖـ ) билдәһе тартылған ( ـُٖـ —ы); يُٖل —йыл, يازوچُٖلارُٖبُٖزنُٖك —язучыларыбызның, جُٖيا —жыя һ. б.

Хәҙер **урта имлә** менән яҙылған ошо өҙөктө уҡығыҙ.

هوا صاف هم طن بولوٓب جيل - داولدن اثرده يوق

ایدی. یراق و آچق کوکده آلماس کبی یالتری طورغان
نورلی یولدزلر برەم برەم کورنه باشلیلر، آنلر بارغان
صاین آرتا، کوبه یه، آخر چیکده بوتون کوك آلر بله ن طو-
لا هم موڭ، ماتور و قاراب طویا آلماسلق بر کورنش
طووا.

Бөгөнгө көндә беҙ был тексты башҡортса ошолай яҙыр инек:

«Һауа саф һәм тын булып, ел-дауылдан әҫәр ҙә юҡ ине. Йыраҡ һәм асыҡ күктә алмас кеүек ялтырай торған нурлы йондоҙҙар берәм-берәм күренә башлайҙар. Улар барған һайын арта, күбәйә. Ахыр сиктә, бөтә күк улар менән тула һәм моң, матур һәм ҡарап туя алмаҫлыҡ бер күренеш тыуа».

Урта имлә менән бик күп китап, газета, журнал баҫылған.

Октябрь революцияһына тиклем булған йәдит мәктәптәре өсөн дәреслектәр ҙә шул урта имлә нигеҙендә эшләнгән.

Был имләнән элегерәк **иҫке имлә** менән яҙғандар.

Ҡайһы берәүҙәр урта имлә менән йәнәш иҫке имләне лә ҡулланғандар.

Хәҙер ана шул иҫке имләгә киләйек. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың үҙ ҡулы менән яҙған ошо шиғырын уҡығыҙ.

زمانیلی فراوان بو دیاردە
طولواورمان ایله قورط مال طواردە

کومک عسکر وزاکون سایه سنده
قرار طابدی تجارلر سوداسنده

---

آیاقلی مال تمامی بته یازدی
آعاچلار آقدی استرخانعه اوزدی
انک آرطنچه اوچدی قورط هم اری
یوق ایمدی طاع کبی اعاچ طاواری

---

بو باشقرط اورمانی تمام کیسولکاچ
سفینه لر طاواردین هم اوزولکاچ
فکرلاب طابدیلار هم باشقه شی نی
قارطال قایرسی قوش هم کوکاینی

Уҡып сыҡҡас, дөрөҫмө-яңылышмы уҡығанлығығыҙҙы ошо транскрипцияға ҡарап аныҡлағыҙ.

Заманилә[1] фәрауан[2] бу диярдә[3]
Тулу урман илә ҡорт мал туар дә

Күмәк ғәскәр вә закон сайәсендә[4]
Ҡәрар[5] табды төжжарлар[6] сәүдасендә

Аяҡлы мал тәмами[7] бтә язды
Агачлар аҡды Әстрханға узды

Анның артнча очды ҡорт һәм әре
Юҡ имде тағ кби агач тауары

Бу башҡорт урманы тәмам кисулкач
Сәфинәләр[8] тауардин һәм үҙулкач

Фикрләп табдылар һәм башҡа шәйне[9]
Ҡаратал ҡайрысы ҡош һәм күкәйне

Шиғырҙа хәрефтәр бик асыҡ яҙылған булһа ла, уҡыу ҡыйын ғына булғандыр. Сөнки унда, берҙән, ғәрәп һүҙҙәре бар, икенсенән, күп һүҙҙәрҙә **а, ә, и, о, ө** һуҙынҡылары юҡ. Бер-ике урында **а** хәрефенә мәт ( ٓ... ) ҡуйылмаған. Шуның өҫтөнә **ы, е** һуҙынҡылары йә ى —**и** итеп, йә و —**у** итеп, ә ڭ —**ң** хәрефе ڬ рәүешендә, ګ —**г** хәрефе ک рәүешендә яҙылған. Был хаҡта 5, 10-сы дәрестәрҙә әйтелгәйне. Күреүебеҙсә, элекке яҙыуҙарҙа тыныш билдәләре ҡуйылмаған.

Хәҙер бынан бер нисә йөҙ йыл элек яҙылған юрматы ырыуы шәжәрәһенән өҙөк уҡыйыҡ. Ул да иҫке имлә менән яҙылған. Уҡый алмаған йәки аңламаған урындарына билдәләр ҡуя барығыҙ.

---

[1] Заманы менән, заманында. [2] Бай, мул. [3] Яҡтарҙа, ерҙәрҙә. [4] Ышығында. [5] Хәл ителеш. [6] Һатыусылар. [7] Бөтөнләй. [8] Караптар. [9] Нәмәне.


..................... حلایقلرمزنی
جیوب الدم ده دیدیم آی یارنلرم بز آق بی بادشاهغه
باردوق باش صالدوق قول بولدوق من تتکاچکه پادیشاه
رحیم ایدب مرضه لق چین بیردی آضنانایغه اسطرسطالق
بیردی وهم پادیشاه دین بوچقان نوغایلار نکرجیرلرون
اوتنوب الدق یوز صوصار یاساق تولامک بولدق ایمدی
سز ده قبول قیلهمو سز دیب صوردم همسی شول حلایق
لر یخشی بارچه لرمز جان دلدان اراضی بولدق دیدیلر اماه

Уҡып сыҡҡас, нисек аңлағанлығығыҙҙы хәҙергесә яҙылған түбәндәге текст менән сағыштырығыҙ. Уҡығансы түгел, ә уҡығас сағыштырыу үҙегеҙ өсөн яҡшыраҡ.

«Халыҡтарыбыҙҙы йыйып алдым да тинем: Эй яранларым, беҙ Аҡ бей батшаға барҙыҡ, баш һалдыҡ, ҡол булдыҡ. Мин Тәтегәскә батша, рәхим итеп, мырҙалыҡ чины бирҙе, Аҙнайға старосталыҡ бирҙе вә һәм батшанан ҡасҡан нуғайҙарҙың ерҙәрен үтенеп алдыҡ. Йөҙ һуҫар яҫаҡ түләмәк булдыҡ. Инде һеҙ ҙә ҡабул итәһегеҙме? — тип һораным. Һәммәһе шул халыҡтар: яҡшы, барыбыҙ ҙа ысын күңелдән риза булдыҡ, тинеләр. Әмма...»

Был өҙөктәге صواصار (сусар) һүҙенә иғтибар иткәнһегеҙҙер. Унда артыҡ ا —а бар. Шуға оҡшаш яҙылышлы һүҙҙәрҙең йәнә осрауы мөмкин. Улар фарсы теленә эйәреп

яҙылған була. Сөнки фарсыла, мәҫәлән, беҙҙең телдә лә булған хужа һүҙе خواجه рәүешендә яҙыла. Бындағы وا беҙҙәге **а** өнө һымаҡ әйтелә: **хаж͡ҙә.** Рус телендә лә ул **ходжа** тип яҙыла: *Ходжа Насреддин* — خواجه نصرالدين (беҙҙә: Хужа Насретдин). Фарсы телендәге خواب (йоҡо), خواهر (һеңле, апай) формаһында яҙылған һүҙҙәр ҙә *хаб, хаһәр* итеп уҡыла һ. б.

Ә نصرالدين (Насро-д-дин) һүҙе кеүек ғәрәп һүҙҙәрендәге ال — **әл**гә йәки бүтән ҡайһы бер һүҙҙәге ل — **л**-гә килһәк, шуны әйтәйек: улар яҙыуҙа булһа ла уҡылмайҙар. Уларҙың берәүҙәре һүҙҙәге тәүге тартынҡының ҡуш булып әйтелеүен белдерә. Икенселәре иһә исемдәге эйәлек килеш ялғауы булалар. Улар ошолай уҡыла: زين الدين — Зәйнө-д-дин (беҙҙә: Зәйнетдин), خيرالدين — Хәйрө-д-дин (Хәйретдин), الدرس — **әд**-дәрес, بالضرور — **биз**-зарур, السلام عليكم — **әс**-сәламө ғәләйкөм, مفتاح الدين — Мифтахе-д-дин (Мифтахетдин), عبدالرزاق — Ғәбде-р-разаҡ (Ғәбдеразаҡ) һ. б.

Бындай ال — **әл** билдәлелек артиклы булып та килә. Ул осраҡтарҙа ال — **әл** уҡыла: مكتب — мәктәб (ниндәйҙер мәктәп), المكتب — әлмәктәб (билдәле мәктәп), كتاب — китаб (ниндәйҙер), الكتاب — әлкитаб (билдәле), مدرسه — мәдрәсә (ниндәйҙер), المدرسه — әлмәдрәсә (билдәле) һ. б.

Былар бөтәһе лә ғәрәп һүҙҙәре. Шулай ҙа элекке яҙыу-

ҙарҙа уларҙың осрауы мөмкин булғанлыҡтан, бик ҡыҫҡа ғына ошо аңлатмаларҙы биреп китеү кәрәк табылды.

Шулай итеп, ҡулдан яҙылған ике тексты уҡып сыҡтыҡ. Ә ҡулдан яҙылған кәрәкле документтар, ҡомартҡылар һеҙгә күп осрар. Улар араһында риҡҡә яҙыуы тип аталғаны ла булыр.

Риҡҡә яҙыуында мәркәсле хәрефтәргә, мәҫәлән, س ، ش хәрефтәренә, мәркәстәр ҡуйылмайынса, улар горизонталь һыҙыҡ ҡына итеп яҙыла. Һүҙ аҙағында килгән ق ، ف ، ن хәрефтәре нөктәһеҙ, һуңғы бөтөмдәре өҫкә ҡарай күтәрелә биреп, түбәнгә табан кәкерсәк рәүешендә (ن ق), ә ه ، ی хәрефтәренең аҙағы аҫҡа төшөрөлөп, артҡа ҡарай бөгөп яҙыла: بلن — белән, علی — Ғәли, ولی — Вәли һ. б.

Һуңғы ваҡыттарҙа яҙылған шуға оҡшаш бер яҙыуҙы уҡыйыҡ.



Уҡып сыҡҡас, түбәндәге текст менән сағыштырығыҙ.

> Һич бер милләткә, һич бер телгә һич бер төрле өстенлек бирелмәскә тиеш. Азсылык милләтләргә һич бер төрле ҡысынҡылыҡ, аз ғына да хаҡсызлыҡ ясамау. Эшче демократиясының принциплары менә шулар.

(Владимир Ильич Лениннең милләт мәсьәләсе).

Элек тә, һуңғы ваҡыттарҙа ла күп кенә китап, журнал, газета исемдәре, мәҡәлә баштары матурлап, биҙәп яҙыла килгән. Ошоларҙы уҡығыҙ:



**Эш таңы**

(1921—22 йылдарҙа Стәрлетамаҡта сыҡҡан газета).



**Башҡорт аймағы**

(Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәтенең 1925 йылда сыға башлаған журналы).



**Әң әски төрөк язиси**

(Бында диакритик тамғалар ҡулланылған).

Бынан 200 йылдан күп элек, 1774 йылда, яҙылған бер хаттан да өҙөк уҡыйыҡ. Был тарихи документ 1974 йылдың 26 майында «Совет Башҡортостаны» газетаһында баҫылғайны.



کونکلومزده اوصال ليق يوقلوغندان ايمدی کونکلومزدا
اوصاللق یوق اکرطا توليق تيلاک تورغان بولسه نکز
يبارکای سز موصبای بیکجان اوعلی ن آرالیقدا یوروب تاتو
لاشتوروراوچون سزدين برکه توتولمش ایکی اوردوس ننک
براون قاینارد وق یازو ايله هم موصبای قایتوب کیلکا نودین
کزین مونده بزننک قولومزدا قالقوچ براوسسن ده انی
قایتورورمزلار بروبرمز ایله ایسپورلاشوب بروبرمیزنی
بولدوروشوب تورورغه ممکین داکولدور .......
....... ایز کولیک تیلا عوچرد وستونکز علاونا
آطامان یولای آزنال اوعلی قولوم قوید وم هم بریکادیرلق
ایشین آدا قیلقوچ کلاونای پولکوونیک صلوات
یولای اوعلی قولوم قوید وم ۱۷۷۴ رجب ننک
ال اکونندا

Был документ — Юлай Аҙналин менән Салауат Юлаевтың Ҡатау (Катав-Ивановск) заводы эшселәренә яҙған хаты. Уны башҡортса ошолай уҡығанһығыҙҙыр:

«Беҙ, главный атаман Юлай Аҙналы уғлынан һәм бригадирлыҡ эшен ада ҡылыусы (башҡарыусы) главный полковник Салават Юлай уғлынан һүҙ шулдыр һеҙ Ҡатау завотында командир булып тороусы прикащиктарға һәм ҡарттарға:

Әгәр һеҙҙең кешегеҙ беҙгә тотолһа, беҙ аны үлтермәйенсә һәм зарар тейҙермәйенсә һеҙгә ҡайтарабыҙ. Әгәр беҙҙең кешебеҙ һеҙгә тотолһа, итәһегеҙ аны тотҡон һәм бәғзеләрен үлтерәһегеҙ имеш һеҙ.

> Әгәр беҙҙең күңелебеҙҙә уҫаллыҡ булаһы булһа, алла теләһә, һеҙҙән артығыраҡ тотоп һәм һеҙҙән артығыраҡ үлтерер инек. Беҙ теймәйбеҙ — күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡлығынан инде. Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ.
>
> Әгәр татыулыҡты теләй торған булһағыҙ, ебәргәйһеҙ (ебәрер инегеҙ) Мусабай Бикйән улын аралыҡта йөрөп татыулаштырыр өсөн. Һеҙҙән беҙгә тотолмош ике урысның береһен ҡайтарҙыҡ яҙыу белән һәм Мусабай ҡайтып килгәндән кзин (һуң), мында беҙҙең ҡулыбыҙҙа ҡалыусы берәүһен дә йәнә ҡайтарырбыҙ. Беҙ бер-беребеҙ белән спорлашып, бер-беребеҙҙе бөлдөрөшөп торорға мөмкин түгелдер...
>
> ...Изгелек теләүсе дуҫтығыҙ главный атаман Юлай Аҙналы уғлы ҡулым ҡуйҙым һәм бригадирлыҡ эшен ада ҡылыусы главный полковник Салауат Юлай уғлы ҡулым ҡуйҙым. 1774 сәнә (йыл), рәжәп айының 15 көнөндә».

Иғтибар иткәнһегеҙҙер: был текста پ —**п**, ۋ —**в** хәрефтәре ҡулланылған, ڭـ —**ң** өнө һәр урында ـڭ рәүешендә, گـ —**г** өнө کـ рәүешендә яҙылған һ. б. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленә хас булмаған: *ада ҡилкучи, тикүрмәйнчә, ирмеш, ирдек, имде, ебәргәйсез, кзин, дәкүл* кеүек һүҙҙәр осрай.

Хәҙерге Әбйәлил районы Рауил, Ҡусҡар, Теләнсе ауылы халҡы 1842 йылда старшинаға ғариза яҙып, инде 100 йыл самаһы ултырған ошо урындарынан, Ҡағы йылғаһы буйынан күсермәүҙе үтенгәндәр, сәбәптәрен күрһәткәндәр.

Шул ғаризаның ошо баш өлөшөн уҡып сығығыҙ ҙа дөрөҫ уҡығанлығығыҙҙы 58-се биттәге текст менән сағыштырығыҙ:

۱۶نچی یورطاه لتوروزیم استطار (شنینی) زاۋرة صعلی نیک صهولطا ناقعق

حضرتینه

گافندانگراه بولغوچی راۋیل قومیقار دیع تلاق آۋیل لاردان

قاغاصخونیع مکام اید وبا ترکلک قیلعوچی جتنر جاعتالر ندا

ن بالجمل توبانچیلکا اۋزارنیع عرضه نامه =

شمول خاقنه اوشبو آبریل منکه و ۲۶نچی کونندع - ۱۶۳۰نچی نومیروده گانطون

باشلغی حضرتندان یولقدورلغان بریتانچانیه بیورنچی کوچروب آلورغه یارلمکه

آمروکانه بناءً — بوخاقنیع غایبه بیعورلماج خالمزنی کورساتیب اوتنیمز

- ایتولی ۱۶ دوشلی کمسینیلارنی استیژانغ وقانونلارغ خلاف اولنیمه ۸ نچی

راۋیزداقالاچیقا جتیل جماعتالار نا راضلیق ایتفاق طمعلاری ایلهٔ

آوّل بویرده بزفقرخالقی آدملار خاقنیکا ترکلک کیچوروب گا غایته تیگزایکن

ایکمکنی پچان صابیقا ایلان آطمزراق اولماقمزدان اوطون تیلا اوستومزده

۸۶۲ نچی راۋیزگا یازلغان اورنلارمز بیلا طارطاۋطاش ایکن وپچان لیک

کی محتاج حتّی برآدمغ صنیمیه باشنی اون بشار کوبه لیکا اوروون یعقی -

۳۶ نچی استیشنی حضرة اورنی معلوم اولوغ یول ایرکان لکی غام خلایقلاری

ایلی برگا اوتلی طورغان تورلی حذمت انکوچیلارمزنی اولاچابوروۋن او

حذمتی

ستومزگا لازیم اید مب هریلنع شهینیه لیتا توعرو سینع ظاۋطلار اۋتا

اۋفوۋ عیرئ ۆجیها ایلان ایلتعب طوغارطورغان یردمز اوزار یس

غایتنع طاۋلی برطراقمز آمان کیلمی آۋلی =ل ۳۰ صا قردم ۆ ایکیچی طرا

فمز ظاۋطه یاغی ۲۲ صا قرصعم مکربز اولما غننع تحقیقی داه یام آطلار

صالوناچقا یورطدان یاردام اوچیین یام آطی آلغانمز یوق اوزمز

یایا ۆقیش کونی راقایرگا بیورلغان اورنغه یام آطی صالامز . . .

16 нчи йортда ләвазим эстаршинә заврәт сотник Солтана꞉ков хәҙрәтенә.

Командаңда булғучи Равил, ꞉Кус꞉кар һәм Теланчи авилларндан ꞉Кағы совнда мәнам идүб трклек ꞉килғучи жител жәмағәтләрөндан билжөмлә түбәнчелк өзәрендә ғариҙә намә.

Шул ха꞉кдә. Ошбу абрилнен 29 нчи көнндә — 1630 нчи номердә кантон башлығы хәҙрәтндан юлы꞉кдурулған претпечаниә бйунча күчрүп алурға язлмыш әмреңә бинаән — бу ха꞉кдә, ғәйбә бйурлмаса, халемзне күрсәтеб, утенәмез... өйли 61 душли кемсәнәләр, начальстваға вә ꞉канунларға хилаф улынмача, 8 нчи равизда калача꞉к жител жәмағәтләренең разилы꞉к иттифа꞉к тамғалары илән:

Әүүәл. Бу ердә без фә꞉кир хәлле адәмлар ха꞉кында трклек кичүрүргә ғайәт дә киң, иген икмәк вә пчән сабма꞉к илән. Атсызыра꞉к улма꞉кымыздан утын тик өстүмездә.

2 нчи. 8 нчи равизга язлған урнларумыз бик тар, тауташ, иген вә пчәнлеккә мохтаж, хатта бер адәмға семья башына ун бишәр күбәлек урын ю꞉к.

3 нчи. Эстаршина хәҙрәт үҙеңә мәғлүм (беҙҙә) олоғ юл икәнлеге; ғам халаи꞉клары илә бергә үтәлә торған төрли хеҙмәт иткүчеләремезни; алау чабуун өстемзгә лазим идүб, һәр йылда шәһинәлы꞉к хеҙмәте тоғросонда. Завотлар үтә Өфө вә ғәйри вижһә илән илтеп туғара торған еремез үҙәри дә ғайәт дә таули. Бер тарафымыз Амангилде авли — 35 са꞉крум, ә икенчи тарафымыз Ҙавот яғы 22 са꞉крум. Мәкәр без улмағанда тәх꞉ки꞉кдә ям[щина] атлары салунача꞉к. Йортдан, ярдам өчин, ям аты алғанымыз ю꞉к. Үземез йәй вә ꞉кыш көни равизга, бйоролған урынғә ям аты саламыз...

Был тексты у꞉кыу еңел булмағандыр.

Ә Төхфәт Йәнәбиҙең 1929 йылда баҫылған «Башҡорт ваҡытлы матбуғаты» исемле китабынан алынған был өҙөктө һеҙ еп-еңел, йүгертеп уҡып сығырһығыҙ. Унда бер үк газета исеменең өс төрлө яҙылыуына ла иғтибар итегеҙ.

# «صالاوات»

«صالاوات» گەزیتی 1919 نسی ییل 21 نسی سین-
تە بیرزە پیتراگراد (حەزر لینین گراد) قالاهیندا باشقورت
دیۋیزیە هینینڭ سەیاسی بولیگی تارافینان تاتار تلیندە
سیعاریلدی. «صالاوات» گەزیتی ئوزینینڭ یوكمە تكیهی مە-
نەندە، تیحنیكاهی یاعینانداێ ئول ساقتاعی سیعا تورعان
حەربی گەزیتتەرزیڭ ئالدینعیهی بولدی.
بینی یینتیكلەپ ئوقیی باشلاهاڭ، هەر هانیندا تیپ
ئەیتیرلیك قیذیل ئەرمیستەرزیڭ هوعیشسانلیعین ئارتتی-
ریوعا بولیشلیق ئیتە تورعان كوكیللی ماتیریالدار باشلیپ
كیلگەنین كورەهیڭ. ئارا تیرە ماتور عنا ئەذمی پار-
سالار- شیعرذار، نەثرزەرزە باشلدی. بیل گەزیتكە
ئشسەندەر ئاراهینان سیققان كوپ كینە كوستەر قاتیش-
لیق ئیتتیلەر.
«صالاوات» گەزیتی باشقورت قیذیل ئەرمیستەرن
لینینگراتتی دوشماندان هاقلاپ ئالیپ قالیرعا، باتیر

يۇ ره كلىٔ بولئوعاحئذ مه ت ئيتتى ، ئولار دئڭ ريۋه ليوتسيون روحتارئن كوته رذ ىٔ .
بئنا، كوپ ميثالدارذان بئر ميثال: « پيتراگراد فرونتئنـ دا بولعان قه هه رمان باشقردلار هه م باشقا شه رقىٔ ايبده شلر! آلدا زور قورقنچ تورا. پيتراگرادقا هو- جوم ايته له ر، پيتراگرادقا ضه رار كيلو بله ن…

Ошо өҙөк менән «Әлифба»ны өйрәнеүгә йомғаҡ яһайыҡ. Әгәр һеҙ уны 2 минут эсендә уҡып өлгөргәнһегеҙ икән, үҙегеҙҙе «5» билдәһе алған тип иҫәпләгеҙ.



1920 йылда газетаның исеме ошолай яҙылған.

Артабан был мөрәжәғәттә, Петроградты йыртҡыс капиталистар ҡулына биреү халҡыбыҙҙы яңынан ҡоллоҡҡа төшөрөү булыр ине, тиелә. Ҡаланы дошмандан һаҡлау беҙгә— фронттағы башҡорт улдарына йөкмәтелгән. Илебеҙ, ярлы халыҡ быны беҙгә ышанып тапшырған. Ғәйрәт, батырлыҡ, ныҡлыҡ кәрәк! Хаҡлыҡ, еңеү беҙҙең яҡта. Питерҙы беҙ бирәүгә лә бирмәбеҙ. Тик ғәйрәт менән талпынырға ғына кәрәк, тип тамамлана мөрәжәғәт.

## Шәкелдәре оҡшаш хәрефтәрҙең төркөмләнеүе.

| № | Хәрефтәр | Миҫалдар | |
|---|---|---|---|
| ١ | ا ﺎ ﻟ ﻠ ل | بالا. بال. بالتا رام | а, л |
| ٢ | ب ﺑ پ ﭘ ت ﺗ ث ﺛ ئ ﺋ | بيت. يئپ. پان. ئات. ئالئت | б, и, е, п, н, т, ҫ, э-ы |
| ٣ | ح خ ج چ | حەليل. خوجا. چاپايق. سەلەح. ساليح | х, ж, ч |
| ٤ | د ذ | دورت هوذ ياذئلدئ. | д, ҙ |
| ٥ | ر ز ژ | زاكير نيژنيگه بارا. | р, з, ж |
| ٦ | و ۇ ۋ | ئۇئۇشئۇ ۋاگونغا ئۇلتئر. يۇرۇمە! | у-ү, о-ө, в |
| ٧ | س ش | سەس. سەئ ئس. ئاش ئاشا. | с, ш |
| ٨ | ع غ | عاتا. ئالغا. پالىغ. نيزاع. غيرەت. | ғ |
| ٩ | ف ق | ئۇفۇ قالاهئ. حەلەف. قاتئق. حاق | ф, ҡ |
| ١٠ | ك گ ڭ | بۇگۇن ميڭە كيلئگئنئ، يەمئ! ئيكمەك | к, г, ң |
| ١١ | ص ض | صالاوات. ضرور. | с, ҙ |
| ١٢ | ط ظ | وطن. حافظ. | т, ҙ |
| ١٣ | م ه | مە، قەلەم. بئلئمئم. هئر. هنلەوهئن ذورمئ؟ | м, h |
| ١٤ | ي ى | قاراى. تارئ. يونلئ. | й, э, е, ы |

# Хәҙерге башҡорт алфавиты тәртибендә ғәрәп хәрефтәре

| Рус хәрефтәре | Азакта | Уртала | Башта | Яңғыҙ | Рус хәрефтәре | Азакта | Уртала | Башта | Яңғыҙ |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| а | ـا | — | — | ا | н | ـن | ـنـ | نـ | ن |
| | — | — | آ | — | ң | ـڭ | ـڭـ | ڭـ | ڭ |
| | — | — | ئا | — | о, ө | ـۇ | — | | ۇ |
| б | ـب | ـبـ | بـ | ب | п | ـپ | ـپـ | پـ | پ |
| в | ـۋ | — | ۋ | ۋ | р | ـر | — | ر | ر |
| г | ـگ | ـگـ | گـ | گ | с | ـس | ـسـ | سـ | س |
| ғ | ـع | ـعـ | عـ | ع | | ـص | ـصـ | صـ | ص |
| | ـغ | ـغـ | غـ | غ | ҫ | ـث | ـثـ | ثـ | ث |
| д | ـد | — | د | د | т | ـت | ـتـ | تـ | ت |
| ҙ | ـذ | — | ذ | ذ | | ـط | ـطـ | طـ | ط |
| | ـض | ـضـ | ضـ | ض | у, ү, в | ـو | — | و | و |
| | ـظ | ـظـ | ظـ | ظ | ф | ـف | ـفـ | فـ | ف |
| е | — | — | يـ | — | х | ـح | ـحـ | حـ | ح |
| ж | ـژ | — | ژ | ژ | | ـخ | ـخـ | خـ | خ |
| | ـج | ـجـ | جـ | ج | һ | ـه ـھ ـە | ـهـ | هـ | ه ھ |
| з | ـز | — | ز | ز | ч | ـچ | ـچـ | چـ | چ |
| и, й, е | ـى | ـيـ | يـ | ى | ш | ـش | ـشـ | شـ | ش |
| к | ـک ـك | ـکـ | کـ | ك | ы, э, е | ـئ | ـئـ | ئـ ئـ | ئ |
| ҡ | ـق | ـقـ | قـ | ق | э, ы | — | — | ٳ | — |
| л | ـل | ـلـ | لـ | ل | ә | ـھ ـە | — | ـٔ | ه ھ |
| м | ـم | ـمـ | مـ | م | | — | — | ا | — |

Ғәрәп алфавитындағы элекке башҡорт яҙмаларын өйрәнеү дәрестәре ошо урында тамамлана.

Яҙмалар тексында осраған ғәрәп, фарсы һүҙҙәре ҡыйынлыҡ тыуҙырғандыр. Уларға бында аңлатма ла биреп булмай. Быны өсөн махсус һүҙлектәр бар.

Ғәрәп хәрефтәрен яҙырға өйрәнеү еңел түгел. Сөнки хәрефтәрҙең яҙылышы бер-береһенән нык айырыла. 61-се биттә уларҙың яҙылышы 14 төркөмгә бүлеп күрһәтелде. Былар һеҙгә яҙыр өсөн өлгө лә булыр. Төркөмдәр һанына ғәрәптәр ҡулланған цифрҙар ҡуйылды. 63-сө биттә беҙҙә ҡулланылған ғәрәп хәрефтәре хәҙерге алфавит тәртибендә теҙеп сығылды.

---

62-се биттәге алфавитҡа ө ҫ т ә м ә:

Ғәрәп алфавитында булмаған **ц, щ** урынына شچ، تس йәки شّ، س **ю, я** урынына يا، يو яҙылған, ә **ь, ь** урынына ء ҡуйылған.

**Ишбулатов Гали Иргалеевич**

**БУКВАРЬ ДЛЯ ИЗУЧАЮЩИХ АРАБСКИЙ АЛФАВИТ**

*(на башкирском языке)*

Редакторы *З. Х. Тимербаева*
Художество редакторы *А. А. Костин*
Техник редакторы *З. Ғ. Чингизова*
Корректоры *В. М. Рәхимова*

ИБ № 4004

Диапозитивтарҙан баҫырға ҡул ҡуйылды 16.12.87. Ҡағыҙ форматы $70\times108^{1}/32$. Киҫек журнал гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Офсет ҡағыҙы. Шартлы баҫма таб. 2,80. Шартлы буяу отт. 3,06. Учет.-изд. таб. 2,08. Тиражы 50 000 экз. Заказ № 161. Хаҡы 5 тин. Башҡортостан китап нәшриәте. 450000, Өфө-үҙәк, Совет урамы, 18. Башкирское книжное издательство. 450000, Уфа-центр, ул. Советская, 18. Башҡорт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.